*Таңсулпан ҒАРИПОВА*

*Донъяға тыуған һәр йән үҙ бәхете, ҡабатланмаҫ үҙ яҙмышы менән тыуған кеүек, яҙыусы ижад иткән һәр әҫәрҙең дә үҙ ырыҫы була торғандыр. Был йәһәттән минең әҫәр «Бөйрәкәй» — балаларымдың иң бәхетлеһе булды, ахырыһы: әле журнал вариантында уҡ («Мөңрәй-мөңрәй килә Бөйрәкәй») киң ҡатлам уҡыусыларҙың иғтибарын, ихтирамын яуланы, китап уҡыусылар конференциялары, диспуттар шаулап үтте. Геройҙарҙың артабанғы яҙмышы менән ҡыҙыҡһыныусылар өйөмә лә, эш урынына ла килде, хаттар яҙҙылар.*



*Әҙәбиәт белгестәренең дә иғтибарынан ситтә ҡалманы роман: «Ағиҙел», «Ватандаш» журналдарында бер нисә рецензия баҫылды, баҫылмай ятҡандары ла байтаҡ. Үҫтергән балалары йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәһә ата-әсә ниндәй кинәнес кисерһә, «Бөйрәкәй» ҙә миңә шундай уҡ кисереш бирҙе. Әле уның икенсе өлөшөн үҙем эшләгән «Ватандаш» журналына тәҡдим итергә булдым. Уның дауамын, әлбиттә, ҡырылмаһа ҡырҡ эш араһында яҙҙым. Ләкин әҫәр тамамланманы: сейәлгән яҙмыштарҙың, хәл-ваҡиғаларҙың «осо» тик өсөнсө өлөшөндә генә килеп сығасаҡ. «Бурыслы ҡол үлмәй», тиҙәр. Мин һеҙгә йәнә бурыслы булып ҡалам, хөрмәтле уҡыусыларым!*

# *Роман*

## Икенсе өлөш

### *Беренсе бүлек*

Мәҙинә үҙенең дөйөм ятаҡтан сығарылғас килеп ингән фатирына кисләтеп ҡайтып инде. Квартира хужаһы, йөҙгә һылыу, телгә сәсән татар ҡатыны Нәфисә, йәш квартиранткаһының буй-һынын һынсыл ҡарашы аша үткәрҙе:

— Ай яныҡайым!.. Әллә инде Бутыркала табырға булдың бәпескәйеңде?!

Мәҙинә, көскә эйелеп, бутыйҙарын систе. Аяҡ кейеменең эсе лыҡа тулы һыу...

— Эй был Мәскәү ҡышы!...

Нәфисә тел шартлатып баш сайҡаны:

— Әстәғәфирулла! Нисек... һығып алмалы еүеш бит ойоҡтарың! Сис тиҙерәк, кей бынау ойоҡбаштарҙы!

Теше тешкә теймәй ҡалтыраған Мәҙинә шешенгән аяҡтарына ойоҡбаштарҙы кейә алмай хитланған арала Нәфисә уның эргәһенә батмус ҡуйҙы, эҫе сәй килтерҙе.

— Күрҙеңме?

— Юҡ...





09-2001.p65 110 29.08.01, 12:42
Black

— Инде нишләмәксеһең?

Мәҙинә һорауҙы яуапһыҙ ҡалдырҙы. Нимә тиһен? Әптеләхәт ҡулға алынғаны бирле унын күргән-кисергәндәре... Ятаҡтан да сығарҙылар, ярай, унда комендант булып эшләгән ошо ҡатын өйөнә алып ҡайтты. Уныһы ла ваҡытлыса, алыҫ йөҙөүҙә йөрөгән ире ҡайтҡансы ғына...

— Эс сәйеңде... эҫе көйө эс... — Нәфисәнең тауышынан уйҙарына сумған Мәҙинә тертләгән кеүек булды.

— Давид... килмәнеме?

— Эй хәтерең! — Нәфисә, үҙенә лә сәй яһап, Мәҙинәнең ҡаршыһына ултырҙы. — Күрҙем! Ятаҡҡа үҙе килеп сыҡты. Мәҙинәгә әйт, өйҙә торһон, бөгөн кис... Ах! Шаҡыйҙармы? Ахыры, ул үҙе!

Ишектән инеүсе ысынлап та Давид ине. Давид Соломонович Гредель. Әптеләхәт менән бер курста уҡыған егеттәренән бер ул ғына дуҫлыҡҡа тоғролоҡ һаҡлап килә.

— Хәйерле кис! Мин һеҙҙе... уңайһыҙламанымммы?

— Һис юҡ! — Алсаҡ Нәфисә батмусҡа тағы бер сынаяҡ, шәкәр ҡуйҙы. — Өшөгәнһеңдер, әйҙә, яҡынла! Беҙҙең һылыуҡай бөгөн бөтөнләй аяҡһыҙ ҡайтты. Әйт әле шуға... унын хәлендә... бына шулай яраймы инде, ә?

Давид Мәҙинәгә ҡаршы ултырғысҡа ултырҙы:

— Нисек?

Мәҙинә өндәшмәне. Нәфисә кухняға сыҡҡан арала Давид кеҫәһенән ҡағыҙ сығарҙы ла Мәҙинәгә һуҙҙы.

Мәҙинәнең тәне буйлап ниндәйҙер ҡалтырау йүгерҙе. Ҡағыҙҙы ҡулына алғас, таныш ҡулды күреп, хәрефтәр сыбарланды. Давидтың ҡарағусҡыл йөҙөндә, ҙур асылған ҡара күҙҙәрендә лә үҙендәге кеүек түҙемһеҙлекте күрҙе. «Мәҙинә һөйөклөм! Хатты алыу менән бынан кит. Ҡайт. Баланы һаҡла. Ошонан тере ҡалһам, ҡасан да булһа күрешербеҙ. Ә хәҙергә хуш!»

— Һиңә нығ булырға кәрәк, Мәҙинә.

— Аңлайым да ул...

— Мин бөгөн... скрипкамды һаттым.

— Тимәк...

— Эйе, һиңә ҡайтырға аҡса кәрәк бит...

Нәфисә ингәндә Мәҙинә менән Давид тәҙрәнән Мәскәү йылғаһына ҡарап өнһөҙ торалар ине. Икеһенең дә йөҙөнә хәсрәт мөһөр баҫҡан. Нәфисә Мәҙинәне аңлай. Унын йәш башына төшкән ҡайғыһының ни тиклем ҙур икәнен төшөнә. Ә был еврей? Ул да ҡайғыра бит. Мәҙинәнең ире менән шулай нығ дуҫлашып өлгөрҙөләр микән?

Өйҙә тынлыҡ. Сәғәт һуҡҡаны, крандан тыпылдап һыу аҡҡаны ғына ишетелә. Үҙенә төбәлгән ҡараштарҙағы кәйефте сағылдырғандай, тышта ойоҫҡоп ҡар яуа башланы. Мәҙинәнең сараһыҙлыҡ ҡоршауында өнһөҙ тыпырсынған йәне талашынан өҫкә ниҙер емерелеп төшөр, ҡыҫыр, баҫыр кеүек...

— Скрипкаңды һатҡанһың... — Мәҙинә быны ҡысҡырып әйттеме, шыбырланымы — Давид ишек төбөнән бер төргәк килтерҙе, сепрәген тағатты.

— Бына... теге мин әйткән скрипка... Мин уны эшләп бөтөп киләм инде.

— Эшләп бөтөп киләһең... — Мәҙинә ебәктәй нәфис бармаҡтарын скрипканың ҡытыршы һабына һалды...

— Тиҙерәк бөт инде, Давид Соломонович. Эх!.. — Ҡапыл Мәҙинә ҡулдары менән тәҙрә тотҡаһын ҡыҫып, башын тәҙрәнең һалҡын быялаһына терәне:

Йәнкәй йәнәш китте, ай, һунарға...
Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә...
Шәшкеләргә китеп вафат булды —
Башҡынайым ҡалды йәш кенә...

Йыр берсә ҡарлы буран булып өйөрөлдө, урманға, ҡалын көрт ҡаплаған ҡырҙарҙа алып сыҡты, берсә ул бер-берегенә өҙөлөп һөйгән ике йәш йөрәктең ҡайнар хисе булып асмандарға ашты, берсә уларҙың өнһөҙ хушлашыуы булып йөрәкте өҙҙө. Ғазап та, шатлыҡ та, һөйөү генә уҡмаштырыр көс тә, ғәйрәт тә, сараһыҙлыҡ та, үкенес тә... Эйе, үкенес... Шул тиклем яратып та айырылышыуға дусар булыу үкенесе...

— Рәхмәт! Рәхмәт һиңә, Мәҙинә. — Бите буйлап һаҡалына борсаҡ-борсаҡ йәштәре тәгәрәләгән скрипкасы еврейҙың ҡулдары, ирендәре дерелдәй ине. — Мәҙинә! Быңдайын моңдо башҡаса... мин бер ҡасан да... Скрипка яһай торған ағасты мин гел һеҙҙең бүлмәлә тоттом... Бына быға, — ул эйәге менән алдында ятҡан, эшләнеп бөтмәгән музыка ҡоралына ымланы, — һинең моңоң... тик һинең моңоң ғына һеңгән. Мәҙинә, бәлки, һине... институтта алып ҡалыр өсөн... мин бөтәһен дә эшләп ҡарамағанмындыр? Бәлки, мин тағы ла ниҙер...

— Юҡ, Давид... Әптеләхәт миңә ҡайтырға ҡушҡан. Тимәк, шулай кәрәк. Бала менән... фатирһыҙ, эшһеҙ, аҡсаһыҙ... Үтенәм, Давид, Әптеләхәт-



09-2001.p65 111 29.08.01, 12:42
Black

те ярҙамыңдан ташлама! Әптеләхәт... йәшәргә тейеш!..

* * *

— Бөгөн нык һаташтың. — Тыштан ҡарағанда бер ни менән дә әҙәм йәшәр төйәкте хәтерләтмәгән, тау ҡыуышына һайгауҙан йышлап яһалған өйҙөң сыуалы янында нимәлер ямап ултырған, йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫҡан ир һәндерәлә салҡатан ятҡан ҡунағына ҡараны. «Ҡунаҡ» яуап бирергә лә, «нимә тип?» тигән һорау менән хәлде асыҡларға ла маташманы, бәлки ауыҙ эсенән үҙе генә ишетерҙәй итеп мөңгөрҙәп ҡуйҙы ла тағы йоҡлап китте.

Бының ҡаршыһында ултырған хужа ямау һалған кейемен утҡа яҡыныраҡ ҡуйҙы.

— Ошо бет тигәнең ниҙән ярала икән? — Үҙ-үҙенә төбәп бирелгән һорауҙан һуң ул ҡабат ҡунағына ҡараны. — Сәбилә тип тә, Гөлбаныу тип тә ҡысҡырғандай булдың. Мәҙинә тигән исемде лә телгә алдың, шикелле. Әллә мәйтәм... — «Ҡунаҡ»тың хырылдап ҡайтанан йоҡоға киткәнен күргәс, хужа шымды. Ошо минутта уның йөрәген, зиһенен: «Был әҙәм, теге ни... Ихсанбай булмағайы!» — тигән уй телеп үтте. Үтеп кенә ҡуйманы, аңын болғатты, бер юлы бер нисә уй уҡмашып, серәшеп зиһенен симәлдәрҙе: уны, Ихсанбайҙы, Зарифа менән сыуалды, тип яҙҙылар. Гөлбаныуҙың малайҙары Ихсанбайҙан икән тигән хәбәрҙе Зарифа яҙғайны бит уға. Ул, Ишмөхәмәт, Зарифа тураһындағы шиктәренең буш икәнен раҫлар өсөн Себергә елдереүсе хәрби поездан һикереп ҡалғайны... Ошонан һуң ниҙәр булғанын, ниҙәр кисергәнен, нисек итеп дизертирға әйләнгәнен, шунан бирле ҡасҡын булып ошо таш ҡыуышында йәшәгәнен — бөтәһен үҙе һөйләп бирҙе Ишмөхәмәт әле хырылдап йоҡлап ятҡан ҡунағына, эсен бушатты. Күпме ваҡыт хәсрәтен эсенә йомоп йәшәгәндән һуң, инде килеп эсен бушатырҙай тере йән, үҙе кеүек бәхетһеҙ бер байғош осрағанына ҡыуана-ҡыуана һөйләне бит ул. Был һыңар, уныһы ла янып сөрөшкән күҙле, әҙәм ҡарағыһыҙ булып зәғифләнгән тере түмәр Ишмөхәмәттең йоҡоһоҙ төндәренең, йылдай оҙон көндәренең шаһитына әүерелде.

Ара-тирә күңелендә төрлө шик ярала, ләкин уны ҡыуа. Ҡурҡҡанға ҡуш күренә, тигәндәй, уны ҡасып-боҫоп йәшәргә мәжбүр иткән яҙмышы шулай тимә бер кешенән шикләнергә мәжбүр итәлер? Йыйған тиреләрен тапшырыуға бирә торған Таулылағы Мөғлифә ҡарсыҡ Тирәклеләге ваҡиғаларҙы һөйләп шаҡ ҡатырғайны бит инде. Мөғлифә алдамайҙыр уны. Ишмөхәмәттең килерен мунса ағып көтөп торған, өҫ-башын йыуған, икмәген бешереп биргән ҡарсыҡ ниңә алдаһын уны?

Ишмөхәмәт, төтөнгә йәшкәҙәгән күҙҙәрен йөрөтөп, үҙенең йәшеренгән төләген тәү күргәндәй байҡап сыҡты. Эйе, ҡасҡын өсөн бынан да уңай урынды көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә таба алмаҫһың. Мәмерйәгә инеү юлын тамыры бер яҡтан ҡупҡан дәү ҡарағас ҡаплаған, ингәс тә уның тау ҡыуышы икәнен шәйләү мөмкин түгел — эскә үткән ярыҡ ҡабырға яҡтан өңөлгән. Шуныһын ғәжәп итте Ишмөхәмәт: был төләктә ҡасандыр кешеләр йәшәгән. Һауыт-һабаларына ҡарағанда, бер бүлә генә түгел, кәмендә ике-өс бүлә ғүмер һөргәндәр бында. Һуңғыһы ошонда ятып үлгән. Әле «ҡунаҡ» ятҡан анау һәндерәлә йән биргән. Һөйәктәренә ҡарағанда, олораҡ кеше булғанға оҡшай. Әруах, рух тигәнгә Ишмөхәмәт элек һис ышанманы. Ә бына ошо һөйәктәрҙе ерләп ҡуйғас, уяулы-йоҡоло ятҡанында сәйер генә хәл булып алды.

Хәтерендә, ул саҡта ла сыуалда ут ята ине. Быҡтырылған ҡуян итен ашап ауырайған Ишмөхәмәт төләгенә күнегеп етә алмаһа ла, арыу үҙенекен итеп, йоҡомһорап китте...

— Эй мосафир, шыл тегеләйерәк... — Ишмөхәмәт был һаҡалтайҙы шундуҡ танығандай булды: был теге һөйәктәрҙең...

— Эйе, эйе... Бөгөн ерләгән әруах мин. Рәхмәт, алла бәндәһе... Йәнем тынсыны. Һөйәктәрем ниһайәт ысын донъяға ҡайтты.

Ғәжәп, Ишмөхәмәт үҙенең әруах менән һөйләшеүен төшөнә, шулай ҙа күңелендә тамсы бер ҡурҡыу юҡ.

— Ниндәй яҙмыш килтергәйне бында һине, рух эйәһе? — Ишмөхәмәт янында ултырған заттың йөҙөнә ҡарарға, күҙенә төбәлергә тырыша.

— Яҡшы көндән әҙәм ҡасҡынға әүерелмәй. Һөйгәнемде бер күреп китеү хаҡына ат урланым мин заманында...

— Ә мин... — Ишмөхәмәт күҙҙәрен асы йәш өтөүен тойҙо, — мин дә, уның хаҡына, уны бер күреп китеү хаҡта... Ә ул...



09-2001.p65 112 29.08.01, 12:42
Black

— Ғүмер ҡайһылай ҙа үтә, Хоҙай бәндәһе! Һөйгәнемдең үлгәнен ишеткәс, ҡырҡ көн ашаманым, ҡырҡ беренсе көн йәнем тәнемдән айырылды...

— Эх, белһәм былай булырын! — Ишмөхәмәт бармаҡтарының йоҙроҡҡа уҡмашыуын тойҙо. — Белһәмсе, шуның кәнтәй икәнен!

— Минең һөйгәнем — ир ҡатыны ине. Йоланы ашатлай алманы. Мин уны ғәйепләмәйем!

— Һин бәхетле... — Ишмөхәмәт уға асыҡтан-асыҡ көнләшеп ҡараны. — Бәхетле йән һин, әруах!

— Әруахтың бәхетлеһе, бәхетһеҙе булмай, Хоҙай бәндәһе! Ә хәҙер — хуш.

— Туҡта әле, әруах, китмәй тор! Ошо тыныс мөйөштө Хоҙай нисек насип ҡылды икән миңә?

— Күк тейендә иҫләйһеңме?

— Эйе, эйе, — Ишмөхәмәт бит остарының ҡыҙарыуын тойҙо. Атырға тип мылтыҡ тоҫҡағайны шул тейенгә, ә ул, килде-килде лә, ҡараған төбөнә еткәс юҡ булды.

— Иҫләһәң, шул: уның ярҙамы менән тапҡан төйәгең был. — Әруах тороп, усаҡ янына килде. — Йәнлектең йәнен былай ҙа күп ҡыяһың...

— Ашаған да, кейгән дә шул бит, әруах! — Әммә Ишмөхәмәткә был ҡыҙыҡ түгел, икенсеһе мөһим. — Әруах! Әйт әле зинһар, бында миңә... йәнә күпме йәшәргә?

— Ғүмерең ахырынаса, ләкин күп түгел.

— Нисек... күп түгел?

— Һиңә килер берәү — ҡунаҡ түгел.

— Әруах?! — Ишмөхәмәт, төләктән арты менән сыға башлаған әруахты туҡтатырға теләп, йән көсөнә ҡысҡырҙы. Ҡысҡырыуы булды — үҙ тауышына үҙе уянды. — Әруах... — Шул уҡ күренеш: сыуалда — ут, ут өҫтөндә — баҡырса, төләккә инер өңдә — яҫы таш. Ул Ишмөхәмәт нисек теркәгән — шулай тора, ҡымшанмаған да хатта.

Ишмөхәмәт әле генә илаған күҙҙәренең йәше лә кипмәгән бер хәлдә тороп ултырҙы. Нимә булды был? Өнмө, һаташыуымы, төшмө? Әруахтың яңғыҙлыҡтан талсыҡҡан йөҙө уның үҙ йөҙө түгелме? Ниңә һуң уның мәлендә военкоматҡа барып енәйәтен һөйләп бирергә көсө етмәне? Төрмәнән ҡурҡтымы? Төрмә... Яңғыҙлыҡтан да ҡурҡынысыраҡ түгелдер бит ул?! Эй алла... Бына ниндәй сараһыҙлыҡ ҡоршауында ҡалды ул. Ярай әле Мөғлифә ҡарсыҡ бар. Йәнлек тиреләрен шуға апарып бирә, тегеһе дарыға алыштыра, һатып, кейем, аҙыҡ, күр-ер ала. Төндә килеүенә мунсаһын яғып ҡуя, икмәген бешерә. Ә һуңғы ике йылда ул бынау «ҡунаҡ»ты әҙәм итеүгә әҙме көс түкте. Ишмөхәмәт тапҡанда ҡортлап, ҡорттан ашалып бөтөп бара ине бит ул. Танауын, ирендәрен, хатта ҡолағының берәүһен ҡорт ашаған. Имәнес булып һаҫыған бер ит киҫәге ине. Шуны әҙәм итеп алды Ишмөхәмәт. Ҡайһылай булһа ла, янында көңгөр-ҡаңғыр итерлек тере йән булыр, тип уйланы. Дөрөҫ, ҡунағы серләшеп тә, үҙе тураһында һөйләп тә бармай. Тик әлеге таш ҡап эсендә үткәргән ҡышҡы оҙон төндәрҙә эргәһендә тын алып ятҡан әҙәм затының һулышын ишетеү үҙе бер бәхет тәһа?!

* * *

Камалетдинов райком бинаһында эш сәғәте бөткәс, ығы-зығы баҫылғас яңғыҙ ҡалырға ярата. Тып-тын коридорҙың бер башында йыйыштырыусы Гөлмәрйәм апайҙың биҙрәһе шылтырап китеүен иҫәпкә алмаһаң, бында һиллек, тынлыҡ, тыныслыҡ. Көндөҙ умарта ояһы һымаҡ геүләп-ҡайнап торған бинала сәғәт һуғыуы ғына ишетелә. Әле ул үҙенең тоноғораҡ, ҡарлыҡҡанылраҡ тауышы менән донъя яралғаны бирле ваҡыт үлсәме барлығын һәм кешенең генә түгел, бөтә йыһан есеменең башының да аҙағының да хакимы Ваҡыт икәнен хәбәр итә.

Эш сәғәте бөтһә, Әйүп Камалетдинов яңғыҙ ҡала. Башҡаларҙың тормошо сәғәткә буйһонмағанын беләә: затзәүер, туған-тумаса, никахлашалар, туйға баралар, үләләр, оҙаталар... Камалетдиновтың бер кеме лә юҡ. Ул шулай өйрәнгән. Уға бөтә район халҡы ҡарап тора, Әйүп тә уларға ҡарай, ә бына күңелен аулаған, зиһенен яулаған бер кем юҡ, һәм шулай яҡшыраҡ та: етәксе халыҡ менән туғанлыҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ ептәре менән бәйләнмәгәндә генә азат тоя үҙен — бер кем дә уға ни менәндер тейеш түгел, ул үҙе лә кемгә булһа ла бурыслы түгел. Колхоз председателдәренең ҡайһыныһын ғына алһаң да шул ауылдан сыҡҡан кеше. Ауылында ҡырҡар-илешәр туған-тумасаһы. «...Нигә тегене тегеләй, быны былайтмайһың?» — тиһәң, йөҙ сәбәп таба ул: тегенең ҡайғылы, бының ауырыуы, уның кәйефһеҙ сағы... Камалетдинов үҙе балалар йортонда үҫкәнгәме, туғанлыҡ, ҡоҙаҡоҙайлыҡ мөнәсәбәттәрен һис ҡабул



09-2001.p65 113 29.08.01, 12:42
Black

итә алмай! Мөмкин булһа, ул етәкселәрҙең барыһын да балалар йортонда үҫкәндәрҙән ҡуйыр ине! Әйҙә, кил дә бойороғоңдо бирә башла. Фронттағы кеүек: бойороҡто насармы, яҡшымы тип тикшереп тормайҙар, үтәйҙәр генә.

Юлбашсының төндә эшләүе, төнөн һәр телефон шылтырауына, һәр ауазға әҙер тороу Камалетдиновты ла йоҡоһоҙ яһаған. Артабан нисек эшләрҙәр, кемдәр килер...

Ваҡыт һуң булыуға ҡарамаҫтан, Камалетдинов өйөнә ҡайтырға ашыҡманы. Өҫтәл өҫтөндәге ҡара телефон аппараты берсә өлкәнәйгәндәй, бергә кесерәйгәндәй. Тағы ниндәй хәбәр алып килер ул Мәскәүҙән? Сталин үлде. Ул барҙа көсөргәнеш нисек кенә көслө булмаһын, барыбер күңел тыныслыраҡ булған икән. Халыҡ бит кисәнән бирле инәһен юғалтҡан умарталай гөжләй. Кем килер уның урынына? Илде икенсе бер юлбашсының Сталин кеүек етәкләп алып китеренә ышанмай күңел. Юҡ ул ундай кеше.

Буталсыҡ ваҡыт килде.

* * *

Мәмерйә алдында һуҡмаҡ юҡ. Ишмөхәмәт төләгенә йәйен-ҡышын ҡыраздан-ҡыразға баҫып, өҫтән йөрөй. Юғары менһәң, ҡая таштар ышығында ултырып, күҙ күреме ерҙәрҙе байҡарға була. Аяҙ көн булһа, уң яҡта ятҡан Таулы төтөндәре, ҡаршылағы Тирәкле өйҙәре күренә. Йылғалар ҙа бынан көмөш уҡалай ялтырап, бөгөлдәрҙә алтын алҡалай йылҡылдап сағыла. Йөрәге һыҡрай Ишмөхәмәттең: унда улын, ата-олатаһы һөйәктәрен һаҡлаған зыярат, йорто, аҡылға зәғиф булһа ла берҙән-бер балаһы Шәңгәрәй йәшәй..

Шәңгәрәйҙең әсәһен дә оҡшатып ҡына алғайны ул. Арыу ғына йәшәнеләр башта. Әммә ҡатыны, ошо Шәңгәрәйе бер көй булып тыуғас, Ишмөхәмәттән биҙҙе лә ҡуйҙы. Ирен түшәк яҡынлығынан мәхрүм итте. Уның биҙеүе Ишмөхәмәттең дә күңелен ҡатырҙы, ҡәрен алды. Ләкин нисек итһен! Ишмөхәмәт тә тере кеше бит, ҡатыны һыуынды тип, уны бит берәү ҙә көйҙөртөп ебәрмәне — нәфсе тигәнең үҙе менән ҡалды. Күп тә үтмәй, күҙе-башы уйнап торған балдыҙы үҙе ҡулға төшөрҙө уны. Ҡатын менән йәшәп-йәшәп бындай ихласлыҡты күрмәгән Ишмөхәмәт Зарифа ҡосағында, әйтерлек тә түгел, ҡояшҡа тейенгән майҙай эрене. Эйе, эйе, Зарифа үҙенең наҙҙары менән ҡылйылан кеүек уның үҙәгенә инеп ултырҙы. Ҡатыны мунсала еҫ тейеп үлмәһә лә Ишмөхәмәт барыбер Зарифаға өйләнер ине. Зарифаның бүрһыҡтай шыма тәнен бер һыйпау бәхетен татып китер өсөн генә был ҡәһәрле донъяға ҡабат тыуыр ине... Ул ғына ла түгел: Зарифа тураһында үҙенә килеп еткән хәбәрҙәрҙең гәйбәт икәнен белеү теләге тотош булмышын биләне, ашауҙан-йоҡонан мәхрүм итте... Әммә ҡайтып етә алманы, хәрбиҙәр өсөн ҡаралған закондар Ишмөхәмәт теләгенән ҡатыраҡ ине...

Ишмөхәмәт, үрмәләп, үҙенең яратҡан ҡаяһы эргәһендә туҡтаны. Ошо ҡая ышығында ултырғанда шәйләп ҡалғайны ул бында төләк тота башлағаны бирле тәүге күргән әҙәм затын. Алыҫтан күренгән һында ҡатын-ҡыҙ һөрмәләнгәс, Ишмөхәмәт мылтығын алып торманы. Кемдеңдер булһа ла Тирәкленән булыуы шикле: берҙән, алыҫ, икенсенән, юл өҫтө түгел.

Урман эсенә инеп, ағастарға ышыҡланып, Ишмөхәмәт һынды яҡынданыраҡ күҙәтте. Оло кеше булһа кәрәк. Йөҙөн тәрән йәрәхәт эҙҙәре йырғыслаған, өҫтө-башы рәтһеҙ. Ҡарсыҡ үлән йыя ине. Өҙгән үләнен бик ентекләп, оҙон-оҙаҡ ҡарап тора, унан, ауыҙ эсенән мыңғырҙап ниҙер әйтеп, моҡсайына тыға. Ҡапыл Ишмөхәмәттең зиһенен бер исем ҡыйып үтте: Мөғлифә ҡарсыҡ! Эйе, эйе! Нисек итеп Ишмөхәмәт уны баштуҡ танымаған? Һуғышҡа тиклем, әле Зарифа менән законлап өйләнешмәҫ борон күргәйне Ишмөхәмәт был Таулының Кәкере ауыл яғында иң осҡо өйҙә йәшәгән ҡарсыҡты. Зарифа алып барҙы уға. Кемдәндер уның ноҡотсо, им-томсо, күрәҙәсе икәнен ишеткән дә, шуға барайыҡ тип Ишмөхәмәттең йәненә генә тейҙе. Таулыға эш менән барғанында ултыртып алып китте балдыҙын Ишмөхәмәт. Үҙенең ташҡын дәрте менән туҡтауһыҙ ярһыта торғас, Таулыға барып ингәндә Ишмөхәмәт күшеккән көсөк дәүмәле генә булып ҡалғандай булды. Баҡсы уларҙы урындыҡ ширлегендә бәләкәй генә килелә ниҙер төйөп ултырған хәлендә ҡаршыланы. Һаулыҡ һораштылар. Алды. Күҙенә төшөрөп бәйләгән яулығы аша бер һирпелеп ҡараны ҡарсыҡ. Ишмөхәмәт иһә өйҙәге китаптарҙың күплегенә хайран ҡалды. «Сихырсы ошолай буламы икән?» тигән уй йүгерҙе башынан. Иш-



09-2001.p65 114 29.08.01, 12:42
Black

мөхәмәт албырғап торған арала ҡарсыҡ үҙе телгә килде:
— Күрәһең, шулай була, улым...
Ишмөхәмәттең ҡолаҡ остарын ялҡын өттө:
— Нимә, инәй?
— Һин уйлаған нәмә, — ҡарсыҡ көләмһерәне, килеһен ситкәрәк ҡуйҙы. Ул арала Зарифа ла баш-күҙ алып өлгөрҙө.
— Инәй, беҙ, мин һәм бына еҙнәм, эй, Ишмөхәмәт, ней, ноҡот бүлдерәйек, яҙмыш юратайыҡ, тип... бергә булыр-булмаҫты ҡаратайыҡ тигәйнексе ул...
— Ултырығыҙ, — Мөғлифә ҡарсыҡ, үрелеп, боронғоса өйөп йыйылған ҡаралды араһынан бер янсыҡ алды, бауын систе һәм шымарып бөткән йәшкелт таштарҙы балаҫҡа бушатты. Ишмөхәмәт ишек эргәһендәге ултырғыстан, Зарифа ҡарсыҡ ҡаршыһынан, ширлектән урын алды.
Ҡарсыҡтың нәҙек оҙон шауҡал бармаҡтары башта таштар өҫтөндә ойоғандай булды. Бармаҡтары ғына түгел, әбей үҙе лә ойоно, ахыры. Әйтерһең дә бер кем юҡ, ул бер үҙе, ултырған ерендә талсығып серем итә...
Күпмелер ваҡыттан һуң ҡарсыҡ бармаҡтары аҫтындағы таштарҙы һәрмәштерә, урындарынан ҡуҙғата башланы. Ауыр итеп бер көрһөндө, иҙеүен тотоп, ниндәйҙер доға уҡыны. Түҙемен юғалтҡан йәш Зарифа ултырған ерендә борһаланды, бер Ишмөхәмәткә, бер ҡарсыҡҡа сабырһыҙ ҡараштарын ташланы.
Ҡарсыҡ, бармаҡтарын таштарға ҡуйып, ҡапыл нисек ойоп китһә, шулай уҡ ҡапыл һүҙ башланы:
— Берҙән-бер балаңдың диуана булып тыуғанына ныҡ көйәһең икән, улым, көймә — ҡылған ғәмәлдәрегеҙгә күрә нәҫелегеҙгә һуғылған мөһөр шул. Башҡаса һеҙҙең нәҫел-тоҡом үрсем бирмәҫтер. Һуңғыһы шул. Төшөндөңмө? Ныҡ аптыраған Ишмөхәмәт урынынан торҙо:
— Ҡыҙҙар ҙа тыумаясаҡмы, инәй?
— Тыуыр ине лә... Ризығың ситкә яҙған бит...
— Ә мин? Минсе?.. — Зарифа ла аяҡ өҫтө баҫты.
— Һин, ҡыҙым... — Ҡарсыҡ бер аҙ уйланып ултырҙы. — Һиңә, ҡыҙым, йәлсеп ғүмер итергә яҡын кешеңә һинең тарафтан ҡылынған рәнйеш ирек бирмәҫ... Дөрөҫөн әйткәнгә үпкәләмәгеҙ, — ҡарсыҡ икеһенә лә күҙ һирпеп ҡарап алды, — доға-ясин менән оҙатылыр һуңғы төләгегеҙҙе лә күрмәйем...
Ишмөхәмәт ҡаушаны, Зарифаның да һылыу йөҙө сирылды, ағарынды.
— Ҡыуандырманың бит әле беҙҙе, инәй, — тигән булды шунан Ишмөхәмәт. — Шулай ҙа, — ул ҡуйын кеҫәһенә үрелде, — сәйлек бирәйем, бөтөнләй буш оҡшамаҫ.
— Кәрәкмәй, — Мөғлифә ауыҙ сите менән генә көләмһерәне. — Шул аҡсаңа Хоҙай бәндәһе улыңа күстәнәс алып ҡайт. Хәйер-фатиханы күберәк шул баланан алырға тырыш. Диуананы рәнйеткән бәндә тамуҡта яныр булыр...
— Ярай, инәй, — Ишмөхәмәт Зарифа сығып киткән ишекте япты ла, тағы бер аҙ ҡарсыҡ ҡаршыһында тора бирҙе. — Ғәйепләмәй ҡал инде. Донъя булғас, бөтәһе лә була торғандыр. Мин дә былай килеп сығыр тип уйламағайным да...
— Тәҡдир бит, улым, — Мөғлифә йәнә көләмһерәне, — һул түш кеҫәңдә ятҡан ҡыҙыл тышлы ҡатырға ғына маңлайыңа яҙылғанды үҙгәртә алмай...
Ишмөхәмәт үҙенең партия ағзаһы өсөн ғәфү итмәҫлек хата юлдан йөрөгәненә йәне әсенгәнен һиҙҙермәй булдыра алманы:
— Теге ни бит әле, инәй, күршеләрегеҙ сағып-фәлән ҡуймаһын инде...
— Ниндәй күрше... Ике өй бар, улары ла бикле, киткәндәр....
— Ярай, инәй, бәлки тағы... Ярҙам кәрәк булһа...
Мөғлифә шунда ғына уға күтәрелеп, оҙаҡ ҡына төбәлеп ҡарап алды...
— Тау менән тау ғына осрашмай, улым...
Ишмөхәмәт йәнә баҫҡан ерендә тапанды:
— Ғәжәп инде, ғәжәп... Һуғыш-фәлән сығып китер микән әллә, инәй?
Мөғлифә таштарын кире янсыҡҡа тултырған ыңғайға көнбайышҡа ҡараған берҙән-бер тәҙрәһенә күҙ һалды:
— Болот ҡупҡан инде, улым. Килә ята инде ул ҡара болот. Күк менән Ерҙе беректереп, һыуҙан — һүл, һүлдән сүл яһап китергә килә болот...
Әле бына ҡаршыһында шул әбейҙе күрә Ишмөхәмәт. Йә Хоҙай! Өнөмө, төшөмө?! Башҡа берәүҙе осратһа, танылыуҙан ҡурҡыр, өндәшмәҫ ине... Ә был бит... «Башҡа осраша алмабыҙ, улым», — тигәйне бит ул. Күрәһең... баҡшылар ҙа яңылыша.Таш ҡыуышында йәшәгән дәүерендә һис бер әҙәм



09-2001.p65 115 29.08.01, 12:42
Black

затын осратмаған Ишмөхәмәттең аяҡтары хәлһеҙләнде.

— Инәй! Мөғлифә инәй?!

Ҡарсыҡ үләнде өҙөргә тип үрелгән еренән ҡапыл турайҙы, яра-йөйҙәр йырғыслаған битен ҡалҡытып, ҡап-ҡара күҙҙәрен Ишмөхәмәт йәшеренгән ағасҡа төбәне:

— Кем... һин?!

— Мин — ҡасҡын. Йәнем — Хоҙай ҡулында. Эргә-тирәңдә кеше юҡмы?

— Хафаланма, Хоҙай бәндәһе. Йәне йән көҫәй торған бәндә мин түгел. Ышанһаң — сыҡ, ышанмаһаң — үҙең ҡара.

Ишмөхәмәт сыҡты. Һаҡал-мыйыҡ ҡаплаған был бәндәгә ҡарсыҡ бер һирпелеп ҡараны, ләкин өндәшмәне. Күрәһең, танымаһы.

— Таулы һынлы Таулынан нисек килеп еттең бында? Һаман шунда, остағы өйҙә йәшәйһеңме? Хәтерләйһеңме, һуғышҡа тиклем мин һиңә йәш бер ҡатын менән килгәйнем? Һин унда, башҡа осрашмабыҙ, минең урынға икенсе берәү килер, тигәйнең.

Ҡарсыҡ үлән тулы моҡсайын арҡаһына аҫты.

— Берәй аҙнанан үҙең белгән шул йортҡа килеп сыҡ... Хуш.

Ҡарсыҡ китте. Ишмөхәмәт тын алырға ла ҡурҡып уның артынан тексәйҙе: кешеме, әллә берәй өрәкме? Күп тә үтмәй, тәҡдире уны теге кешегә дәл итте: төрмә ҡушаматым — Бурһыҡ, тине ул. Ишмөхәмәт иһә уға «Ҡунаҡ» тип исем бирҙе. Ошо ҡарсыҡтан алған төнәтмәләр менән шуның ҡортон бөтөрҙө, яраларын бөтәштерҙе Ишмөхәмәт. Тормошо арыу ғына рәтләнде: Мөғлифә ул атып алған йәнлек тиреләренән бүрек тегеп баҙарға сығарып һатты, итек-сарыҡ та оҫталаны, килгән саҡтарында мунса төшөрҙө, әммә үҙе менән ҡасан да булһа «Ҡунаҡ» ты алып килеүҙе, уға был йортто атауҙы тыйҙы... Мөғлифәнең элек күрәҙәлек итеүенән ҡалған тәьҫораты буйынса Ишмөхәмәт унан ноҡот бүлеүен бер нисә тапҡыр һорап ҡараны, мәгәр яуап бер төрлө булды:

— Тәҡдирҙе яҙлыҡтырыр көс булһа икән... Шулай булғас, юрау нимәгә?

— Ҡасаҡ булып... үлгем килмәй, инәй... Анау малайҙың башына кейҙермен тип, кеш тиреһенән бүрек теккән булғайным...

— Тәҡдирең ҡушмаһа, үлеп булмай, яҙмаған әйберҙе кейеп булмай... Өҙгәләнмә, Хоҙай бәндәһе!

Был һөйләшеү күптән түгел генә, уҙған барғанында ғына булды. Мунсаға инер алдынан ҡарсыҡ уға аҡ меткалдан тегелгән өр-яңы эс кейемдәре тотторҙо:

— Быларҙы кейгәс, кәләш ҡуйынына инергә ине, инәй, — тип шаярған булды Ишмөхәмәт, унан ҡапыл етдиләнде. — Хәйер, гүр эйәһе булғанда ла таҙаға төрәләр, ниңәлер... аҡҡа сырмайҙар...

Ҡарсыҡ өндәшмәне.

— Ишмәмәт! — үҙенең ауыл ҡушаматын ишетеүҙән һиҫкәнеп, Ишмөхәмәт аяғүрә баҫты. Баҫыуы булды — мылтыҡ тауышы яңғыраны. Үлемдең ҡайҙан, кемдән килеүен төшөнөргә өлгөрмәгән Ишмөхәмәт бер ҡулы менән артындағы ҡая ташҡа тотонорға теләне — ҡулдары буйһонманы, шул секундта тиерлек ул, ҡаянан айырылған бер таш кеүек, түбәнгә, ҡалын ҡар менән ҡапланған, хәтәр сөңгөлдәр йәшергән йылғаға атылды, әммә яр ситендә үҫкән ҡарама уға тәгәйен еренә төшөргә ирек бирмәне — кәүҙәдәү ботаҡтарҙан торған сатырға эләгеп тороп ҡалды...

* * *

Таулының артта ҡалыуына ла әллә ни саҡлы ваҡыт үтте. Камалетдиновтарҙан атылып килеп сыҡҡан ҡыҙыулығы алды-артына ҡарамай атларға мәжбүр итте уны. Белмәне Мәҙинә Әйүп Ғәзизовичтың өйләнгәнен. Күтәренеп барып инерҙән алда кешенән һорашҡылаған булһасы! Үҙенең кәрәкле кишер япрағы икәнен инеү менән, теге затлы халат кейгән аҡ йөҙлө ханымдың үҙенә сирҡанып ҡарауын күргәс тә төшөндө лә һуң, ниңә шундуҡ сығып китмәне икән Мәҙинә? Ә ул торҙо. «Мәликә ханым булам», — тигән ҡатындың ырыя тәкәбберлеге аҫтында ҡарышлауыҡтай бөгөлөүен, йәненең күренмәҫлек дәрәжәлә кесерәйә, ҡурыша барыуын тойһа ла торҙо.

— Әптеләхәттең ҡатынымын тиһеңме? — Мәликә, Мәҙинә аша таныш булмаған Әптеләхәтте күрергә иткәндәй, күҙҙәрен ҡыҫты. — Флориданың атаһының бер ниндәй ҙә Әптеләхәтте телгә алғаны юҡсы...

— Беҙҙең Мәскәүгә киткәнгә... ике йыл. — Мәҙинә теленең үҙенә буйһонмауын, ауырайып ҡатыуын тойҙо.

— Һы ... беҙҙең Әйүптең кешелә хаталана торған гәҙәте бар инде ул. Бар.

— Улар... Камалетдинов ағай менән Әптеләхәт... һуғышты бергә үт-



09-2001.p65 116 29.08.01, 12:42
Black

кәндәр, — Мәҙинә тамағына төйөр тығылып, тынын быуғандай булғас, тунының үрге төймәһен ысҡындырҙы…

Мәликә ханымдың быға ҡаршы яуабында дорфалыҡ хаттин ашҡайны:

— Ах шул һуғыш! Әйтерһең, унда һәр кем йәне теләгәнде һайлаған! Әптеләхәт тигән берәүҙән… бандит сығырын белһә, Әйүп уны яҡын юлатыр инеме?!..

— Һеҙ… нисек… — Мәҙинә башҡаса һүҙ таба алманы, бер ҡулы үҙенәнүҙе ишек тотҡаһына йәбеште, икенсеһе ашығып-ҡарһаланып иҙәнгә ҡуйып торған төргәген һәрмәне. Мәҙинәнең ауыртҡан иренә — сәпкә тейҙереүен төшөнгән Мәликәнең тауышы унын һайын көрәйҙе:

— Нисек, нисек… Мин — аллаға шөкөр! Бына һеҙ, һинең ирең… нисек итеп үҙен әҙәм иткән халҡына дошманлыҡ ҡыла алды икән?!

— Әптеләхәт дошман түгел! Булманы ла!!!

Мәҙинә һуңғы һүҙҙәрен Камалетдиновтарҙың өйөндә әйттеме, әллә сыҡҡасмы — уны хәҙер үҙе лә хәтерләмәй.

Күҙ алдында аҡ ҡар ҡыҙыл ҡан булып болғанды, аяҡтары үҙҙәренәнүҙҙәре Тирәклегә киткән юл буйлап атланы. Шунан бирле килә ул. Мәскәү консерваторияһының дөйөм ятағынан, аҙаҡ уҡыуҙан сығаргандарында ла был тиклем ҡыйын булмағандыр. Ул саҡта әле Мәҙинәне тыуған төйәгем, беҙҙе яҡындан белгән кешеләр бар, улар аңлар, улар һыйындырыр тигән уй йылыта, шул уй йәшәргә көс бирә ине, ә хәҙер…

Ҡапыл Мәҙинә ҡарынындағы йән эйәһенең сабырһыҙланып тулағанын тойҙо.

— Аһ! Әллә инде мин…— Мәҙинә сараһыҙлыҡтан атылып сығыр сиккә еткән күҙҙәрен оҙон юлға, юл ситенән сикһеҙлеккә китеп юғалған аҡ ҡар менән ҡапланган яланға төбәне. — Нишләнем мин?!!

Ошоға тиклем үҙе менән бер йән, бер тән булған сабыйҙың тәүлектең теләгән бер ваҡытында донъяға килеүен, йәғни әсәһенән айырылырын ҡапыл төшөнөүҙән Мәҙинәнең аяҡтары хәлһеҙләнде, йөрәген ҡурҡыныс билдәһеҙлек һулҡылдатты. «Нишләнем мин?! Ниңә мин йәйәүләп ҡышҡы юлдан илле саҡырымда ятҡан Таулынан сығып киткәнсе, дауахана ишеген шаҡыманым?!»

— А-у! — Мәҙинә, эргә-тирәһендә тере йән юҡлығын белһә лә, һуңғы өмөтөн бағлап, йәнә ҡысҡырҙы —Э-һей! А-а-а!

* * *

Март ҡояшы күҙҙе ҡамаштырырлыҡ ярмалы ҡар бөртөктәрен нурептәргә теҙә. Хашим, юлдан боролоп, Гөлбаныу ҡәбере янында туҡтап китергә уйлағайны ла, тәрән көрт ирек бирмәне. Иртә яҙ көнө ерләне ҡатынын Хашим, эргәһенә тағы ҡар һыуҙарының ташҡыны баҫылғас, ҡаулан аҫтынан тиртҡән умырҙаялар мәлендә килер ул. Ошо иҫерткес, илерткес миҙгел күҙҙәре — умырзая төҫлө ине Гөлбаныуҙың күҙҙәре лә. Ғүмеркәйе лә уның ошо миҙгел сәскәләрендәй зая һәм ҡыҫҡа булған икән…

Тәрән үҙәкте үткәс, Тәңребирҙе буйлап өҫкә күтәрелгән сана юлынан китте Хашим. Бөгөн тейәй торған бесән шул тирәлә булырға тейеш, Хашим үҙе ослағайны ул кәбәнде.

Ике санаға ла ауалатып бесән тейәгәс, Хашим ҡайтыр юлға сыҡты. Оло юлға төшөп алһа, ашыҡмай ғына, уй йомғағын һүтә-һүтә ауылға табан юлланыр. Ә уйҙары унын икһеҙ-сикһеҙ, бынау ҡояшы көлөп, күге күгәреп торған ҡотоптоң үҙе кеүек төпһеҙ. Һәр кешене, һәр үләнде, һәр йән эйәһен аңларға, төшөнөргә тырыша Хашим, тырышҡан һайын, төпкәрәк төшкән һайын уйҙары ҡатмарлана, һағыштары тәрәнәйә. Әле бына Шәңгәрәй яҙмышы ла, Мирхәйҙәров менән булған һөйләшеү ҙә тынғы бирмәй.

Шәңгәрәй тигәндәй, Хашимдың бала сағындағы бер хәл иҫенә төштө. Айыт көнө ине, буғай. Хашим, әсәһе тегеп биргән борсаҡлы бәз күлдәк-ыштандан, усына йоморолай бешкән бер йомортҡа тотоп, урамға сыҡты. Сығыуы булды, малайҙар һырып та алды уны.

— Э-һе-е-ем, күлдәге беше икән! — Бер-икәүһе килеп, Хашимды бора семтене. Хашим өндәшмәне, түҙҙе. Тәртибе шулай. Яңы кейемде кейгең килгәс, бер-ике көн семтектәгәндәренә түҙмәй әмәлең юҡ.

— Усындағы нимә ул?

— Йомортҡа, — Хашим «аша мине, йот мине!» тип тетрәп ятҡан йомортҡалы усын асты.

— Һәй-й-й, — малайҙар алданған, мәсхәрә ителгән бер ҡиәфәт менән ситкә ҡараны, — йомортка тип торған була… Картуф бит!..

— Түгел! — сәменең сәбенә тейгән малайҙарға Хашим эстән рәнйеһә лә,



09-2001.p65 117 29.08.01, 12:42
Black

үпкәһен белдермәскә тырышты. — Ышанмаһағыҙ, ни... ашап ҡарағыҙ.

— Ҡана... — Хашим аңғармай ҙа ҡалды, әллә ҡайһы арала әллә күктән, әллә ер тишегенән пәйҙә булған Шәңгәрәй ауыҙында ине йомортҡа. Шарик шуны сәйнәмәй-нитмәй йоморолай көйөнсә йотто ла ҡуйҙы.

— Һы! — Ымһынған малайҙар йәнә Хашим үҙе Шәңгәрәйҙең ауыҙына ҡарап байтаҡ өнһөҙ торҙолар.

— Һармаҡ! — Йоҙроҡтары ҡыҫылған Хашим Шәңгәрәйҙең икмәк шүрлегенә бер-икене менеп төшкәнен үҙе лә шәйләмәй ҡалды. Шул ике арала әллә ҡайҙан әсәһе килеп сыҡҡан:

— Нишләүең был, Хашим?

— Үҙе нимештәп минең йомортҡаны ашаны?

— Шәңгәрәй түгел, юҡлыҡ талаштыра һеҙҙе, балам! — Балаларҙың араһына ингән әсәһе, Хашимды етәкләп, өйҙәренә тартты. — Әйҙә, улым, тауыҡ тағы йомортҡа һалһа, мин һиңә тағы бешереп бирермен. Шәңгәрәй, һин дә ошонда көтөп ултырып тор, йылы икмәктең сауабы ҙур — йылы икмәк сығарып бирәйем.

— Шәңгәрәйгә бирмә! Алйот бит ул, диуана!

— Сеү! — Әсәһенең ҡото алынып улының ауыҙын ҡапланы. — Диуананы рәнйеткән кешегә ҡот йоҡмай! Ул Хоҙай бәндәһе!

Шулай тигәйне әсәһе. Ә Хашим уның һүҙҙәрен шундуҡ онотто. Унан бирле әҙме рәнйетте ул Шәңгәрәйҙе! Бахырҙың Гөлбаныуҙы донъяуи булмаған һөйөү менән ратыуынан әҙме көлдө... Их, үткәнде ҡайтарып булһа!.. Һуңғы ваҡыт ул Хоҙай бәндәһенә хәленән килгән ярҙамды күрһәтергә тырышып ҡараған булды ла бит, барыбер һаҡлай алманы... Дөрөҫөн әйткәндә, Шәңгәрәйҙән көлгән дә, ҡаҡҡан-һуҡҡан да, тартҡан-ҡурсыған да бер Хашим ғына булманы. Төндә ут тирәләй күбәләге лә, себене лә, серәкәйе лә йыйылып әйләнгән кеүек, Шәңгәрәй тирәһендә лә кем генә әйләнмәне! Зарифа уны этә, Ихсанбай беткә, тағы кеме нимәгә генә әйләндермәне! Ҡайһы саҡ Хашимдың башына шундай уй килә: диуаналарҙы Хаҡ тәғәлә бәндәнең игелеген үлсәр өсөн яратмаған микән?!

Хашимдың уйҙары кеүек үк ауыр йөк тейәлгән саналар тартҡан аттар бышҡыра-бышҡыра тауға артыла. Алдағы йөк башында ултырған Хашим әлдән-әле Тураtҡа әйләнеп ҡарай. Аҡыллы мал. Теле булһа, кешегә сисә алмаған уй-серҙәрендә ошоға һөйләп булыр ине. Ошо ат менән юлға сыҡһа, Хашимдың күңеле тыныс. Тирә-яҡ тын. Ара-тирә һайыҫҡан шыҡырлағаны, шуларҙың пырылдап ағастан-ағасҡа һикергеләгәне генә ишетелә. Ә, юҡ, һайыҫҡан ғына түгел икән: кемдеңдер санаһынан көнъяҡта үҫкән ҡыҙыл алмалар һибелеп ҡалғандай, өйкөм-өйкөм булып ҡантүш турғайҙар ултырған. «А-а-а!» — ниндәйҙер тауыш ишетелгәндәй булғас, Хашим атын туҡтатты. Уның артынса Турат та, ҡолағын ҡайсылап, туҡтап ҡалды. Тауыш йәнә ҡабатланды. Был юлы ул баяғынан да әсерәк, хәүефлерәк яңғыраны. Ҡатын-ҡыҙ ҡысҡыра! Хашимдың зиһенен бер уй телеп үтте: бүреләр! Тик... тауыш биреүсе нишләп күренмәй?

* * *

Юл ситендәге көрткә йәбешеп бөгөлөп төшкән ҡатын-ҡыҙҙы абайлағас, Ихсанбай бер талайға ҡаушап ҡалды. Ул! Мәҙинә! Ҡатын-ҡыҙ көсәүҙән талсыҡҡан нәфсеһе оторо ярһыған саҡтарҙа күңеле уға Мәҙинә һынын күҙ алдына бихисап тапҡырҙар баҫтырһа ла, осрашыуҙың бындайын көтмәгәйне Ихсанбай. Бына ул үҙе. Теге ҡәһәрле төндөң сәбәпсеһе. Ихсанбайҙың Хоҙай тарафынан ебәрелгән язаһы. Эйе, ул үҙе. Ошоно Ихсанбайға дәл итмәҫ өсөн әсәһе Фәүзиә ҡарсыҡ ниндәй генә мәкерле ауҙар ҡорманы: имештер, ул Гөлбаныуҙың ҡыҙы, ә Гөлбаныу һинең... игеҙ һыңарың! Ха-ха!

— Ы-ы-ыһ! Эсем, билем! Өҙөләм, ағай, үләм!!! — ирендәрен ҡанатҡансы тешләгән Мәҙинәнең юл ситендәге ҡар һырынтыһына йәбешеп бөгәрләнеүен Ихсанбай өнһөҙ күҙәтте. — Ярҙам, ярҙам ит, ағай?!

— Ҡалайтып... нисек? — Ихсанбай, эйелеп, уны күтәрергә маташты, ләкин ҡатын йәнә бөгәрләнде, йәнә һырынтыға йәбеште.

— Ю-у-уҡ! Аһ! Ат... Ауылға... — Мәҙинәнең күгәргән ирендәренән өҙөкһурыҡ сыҡҡан һүҙҙәр Ихсанбайҙы йәнә ысынбарлыҡҡа алып ҡайтты. Ауылға?! Ат?! Ә ул яңғыҙы ҡалһа?!. Юҡ... Ихсанбайҙың аяғында — саңғылар. Ул һунарсы түгел дәһә! Ул лаһаң... йәһәннәмдең үҙенән ҡайтып килә!

Тулғағы ебәреп торҙомо, Мәҙинә ҡапыл турайҙы, хәлһеҙ ҡулдары менән көрттө ҡапшап, янтая биреп, юл ситенә ултырҙы.



09-2001.p65 118 29.08.01, 12:42
Black

— Һин кем, ағай?

— Танымайһыңмы? — Ихсанбай тауышының элеккегә һис тә оҡшамағанын, ғырылдап, янған, утҡа бешкән тамағынан шыйылдап сығыуына һөйөндө. — Сырамытмайһың дамы?

— Юҡ...

— Ишмөхәмәт ағайың мин... Атайыңдың... Хашимдың еҙнәһе.

— Ә?! — Аптырауҙан ҡара күҙ алмалары ҡатып ҡалды Мәҙинәнең... — Һин һуғыштан... — Ихсанбайҙың йолон буйы семберләне, маңлайынан тир бәреп сыҡты:

— Эйе, ҡарындаш... Мин һуғыштан... йәһәннәмдең үҙенән яңы саҡ... ҡайтып киләм. Күпте күрҙем, түҙҙем. Һин дә түҙ. Саҡ ҡына түҙ...

— Шәңгәрәй... — Мәҙинә йәнә тулғаҡ ҡыҫымында тартышты. — М-м... меңкен... шатланыр инде!

— Түҙ! — Ихсанбай Мәҙинәне йәнә күтәреп алырға итте, әммә ҡулбашының һеңере янған ҡулы көсһөҙ ине. — Ыһ!

— Кәрәкмәй, ағай... Ни, Ишмөхәмәт апа, мин үҙем...

Ихсанбай, аптырап, тирә-яғына ҡаранды. Бына ул урын! Гөлбаныуҙың башына еткән урын! Бүреләрҙән ҡамалып, йөрәге ярылып ҡына үлдеме икән?.. Ихсанбай үҙе шул йыртҡыстар менән күҙмә-күҙ нисәмә осрашты, мәгәр тегеләр теймәне бит уға. Әгәр ошо үҙәкте сығып, тауға күтәрелһә...

— Һин ултырып тор, Мәҙинә. Бына шулай, саңғыға... Мин — хәҙер! — Ихсанбай, ҡарһаланып, тауға үрмәләне. Бер яҡтан, ул Тирәкле кешеһе менән тәүге һынауҙы үтте. Һәйбәт, шыма үтте. Әгәр ҙә ауырлы ҡатынды ҡотҡара ла алһа, Ихсанбайҙың Тирәклеләге киләсәк тормошо өсөн бер ҙур мәртәбә ләһаң!

Үргә менеп, Тирәкле яғына ҡараш ташлау менән Ихсанбай туҡтап ҡалған бесән ылауын күрҙе. Ана, бесәнсеһе үҙе былай табан килә. Ах!... Хашим ҡәһәрең! Шул... үҙе...

## *Икенсе бүлек*

Ирен көтөп ала алмаған саҡтары йыш була Мәликәнең. Әлдә ҡыҙғынаһы, бәләкәс Флоридаһы бар. Шуның «Ә-ә!» тип кескәй ҡулдарын һуҙыуы була — Мәликә барлыҡ эс бошоуҙарын, шикле уйҙарын, иҫенә төшөргәндә арҡаһынан быу бәрҙерерҙәй үткәнен — барыһын онота. Әле ул йоҡлай. Мәликәнең тырышлығы менән буйҙаҡ ирҙең толҡаһыҙ донъяһынан ожмах сүрәтенә ингән фатирына Мәликә киске һүрән ут яҡтыһында ҡарап ултырырға ифрат ярата. Эйе, бары ла үтте. Һуңға тиклем эшләүен, ғөмүмән, эштән бушамауын иҫәпкә алмағанда, Мәликә ирҙең елләһен элэктерҙе. Районның иң төп хужаһы булыу өҫтөнә, эсмәй, игелекле, аҡсаны ҡайҙа ҡуйҙың, ҡупме тотондоң, теге-был тип бәйләнмәй. Флоридаға ҡарата уғата итәғәтле. Шылтыратһа, башта уның һаулығын һораша. Гел ошолай барһа ине ул тормош...

Мәликә асыҡ иҙеүле халат эсенән күпереп күренә бирео торған түштәренә ҡараны, ҡулы, ирекһеҙҙән, шунда күтәрелде: баланы имеҙеүҙән туҡтаһа ла улар шулай тығыҙ, түңәрәк көйө ҡалыр микән? Мәскәүҙә, дөйөм мунсаға йөрөгәндә, Мәликә төрлө рәүешле, төрлө һыпатлы ҡатын-ҡыҙҙы күрҙе. Тәүбә, тәүбә!.. Әлегә уның килеш-килбәтенә һүҙ тейҙерерлек түгел, тик... Эйе, тик Әйүп кенә һирәк ҡағыла был мөхәббәт алиһәһе булырҙай һынға. Хәйер... Мәликәгә ул яҡтан да яҙмышына үпкәләрлеге юҡ. Әйүпкә сыҡҡанда шул уҡ ир заттарының ҡомһоҙ ҡараштарынан ғына түгел, ҡомһоҙ ҡулдарынан да тамам арығайны, биҙгәйне, үҙенә кеше итеп ҡарар берәй бәндә осратыуынан өмөтө өҙөлгәйне...

— Ә-ә... — йоҡо аралаш һаташҡан ҡыҙы Мәликәнең уйҙарын бүлде.

— Нимә, ҡыҙым, бәү, бәү... Йоҡла, минең матурым!

Әммә ҡыҙы күҙҙәрен асып өлгөргәйне. Бына шулай ул: төн еттеме, ун ике тулдымы — күҙҙәрен аса. Шул уяныуҙан таңға тиклем керпек тә ҡаҡмай. Бер ере ауырталыр тиһәң, бик илап та бармай. Мәликә балаһын докторҙарға ла күрһәтеп ҡараны — береһе-бер айырым-асыҡ фекер әйтмәне.

— Эй бала, — Мәликә ҡыҙын түшәктән алып күкрәгенә ҡыҫты. — Йоҡлар саҡтарыңда йоҡлай алмай ыҙалайһың бит... Атайыңа әйтеп ҡарарғамы? Ҙурыраҡ ергә алып барыр кәрәктер һине...

«Ҙурыраҡ ер» тигән уй башына килеү менән Мәликә көндөҙ ирен һорап килгән ҡатынды иҫенә төшөрҙө. Уға ҡапыл ҡаты бәрелеүенең сәбәбен башта үҙе лә аңламағайны. Бына әле, тәҙрәләр аша ҡараңғы, толҡаһыҙ, битараф төн баҡҡан бер мәлдә, ул шулай уҡ ҡапыл үҙ ҡылығының серенә төшөндө:



09-2001.p65 119 29.08.01, 12:42
Black

ошо йөклө, ҡайҙа барып морон төртөргә белмәй килеп ингән йәш ҡатында ул үҙенең... эйе, үҙенең... хәтирәләргә бирелеү өсөн артыҡ күңелле булмаған үткәнен күрҙе. Эйе, эйе!.. Ул осраған берәүгә яҡлау эҙләп баҡҡан ҡара күҙле был йәш ҡатынды түгел, был нәзәкәтле йыһаз менән биҙәлгән, байлыҡ-байманлыҡ еҫтәре бөркөлөп торған өйҙән үҙенең үткәнен ҡыуып сығарҙы!

Телефон шылтыраған тауыш Мәликәне лә, уның бәләкәй ҡыҙын да һиҫкәндерҙе.

* * *

Фәүзиә-Барсынбикә Мөғлифә ҡарсыҡтың өйөн тыштан да, эстән дә байҡап үҙенә яңынан-яңы асыш яһай бара. Йорт ҡасандыр оло бер урамдың осонда булған. Әммә өй янында үҫкән тирәктәр, унан һуң ҡыяраҡ ятҡан ике уба ситтән ҡарағанда уны бәндә күҙе абайламаҫлыҡ иткән. Убаларҙың береһенең ситенән сөбөрҙәп һыу аға — уға торба ҡуйылған. Торбанан сөптөрләгән һыу янында — мунса. Өй эргәһендә бәләкәйерәк аласыҡ та бар. Уныһы аш өйө. Фәүзиәнең хәтерендә: борон аш өйҙәре һәр саҡ төп йорттан ситтәрәк төҙөлә торғайны.

Ихатаның бер яҡ ситендә — лапаҫ. Күрәһең, ҡарсыҡ элегерәк мал да тотҡандыр. Ситән кәртәгә өс аттың ҡыу баш һөйәге эленгән. Лапаҫҡа инер ҡапҡа башына салғы ҡыҫтырылғанын да шәйләне Фәүзиә. Ҡыҙыҡ, тап Фәүзиә-Барсынбикәнең бала сағында йәшәгән йорто кеүек, тик бында үлсәмдәр башҡа, кесерәк...

Ҡарағас йорттоң ҡасан һалыныуын билдәләүе ҡыйын, мәгәр ҡарағас таҡта менән көпләнгән һәм шундай уҡ таҡта менән уратып ҡоршалған был өйҙөң тағы әллә нисә быуын әҙәмгә хеҙмәт итеренә шик юҡ. Иҙәндәре лә ҡарағастан, йыуғас, ҡыҙарышып, баҙырап киттеләр.

Өй эсендәге монаяттың боронғолоғона ла иҫе китте Фәүзиә-Барсынбикәнең. Ниҙәр генә юҡ бында! Түрлө ҙурлыҡтағы батман-күнәсектәр, ағас табаҡ-сеүәтә, ырып яһалған ижауҙар, ағастан яһалған ҡул тирмәне, киле, ялғаш... Ошо саҡлы монаят һаҡлаған йортҡа ҡарсыҡ киткәне бирле берәү инмәгән, берәү теймәгән.

Бохара, Мәккә яҡтарынан килгән ҡом көршәктәр, ҡом тәгәстәр ҙә бар бында. Фәүзиә-Барсынбикә хатта бында үҙенең бала сағында һаҡлап ҡына тотҡан, шуның семәрҙәренә сәғәттәр буйына ҡарап ултырырға яратҡан йәйенке тәгәсе ише һауытты ла осратты. Тәндәре эҫеле-һыуыҡлы булып, күҙҙәренән йәш бәреп сыҡты: ошо һауыт уны кеҫәртке ҡойроғо шикелле замандың теге ягында, яҙмыш даръяһының теге ярында өҙөлөп ҡалған ғүмере менән ялғаны. Барсынбикәнең өҙөк-һурыҡ, ҡоршау-ямауҙарҙан торған булмышын бер бөтөн ҡылды... Бына ул, Барсынбикә, тирә-яҡта үҙенә тиңдәш-көндәш белмәгән башҡорттоң һомғол буйлы, муйылдай ҡара күҙле һылыуы, тәгәсен тотоп өләсәһе ҡаршыһында баҫып тора. Яратҡан ейәнсәрен күреүҙән күҙ төптәрендә нурйыйырсыҡтар уйнатҡан өләсәһе ағас ҡалаҡ менән шул семәрле һауытҡа күбек майы һала:

— Аша, ҡыҙғынам, күбек майҙай йомшаҡ булырһың.

— Ә ниңә һары май кеүек тимәйһең, өләсәй?!

— Һары май етеҙ була, күңелгә тиҙ тейә, бүктерә...

Эйе, күбек майҙай сағы тиҙ үтте шул Барсынбикәнең!.. Күбектең үҙе кеүек: шиңде лә юҡ булды. Ҡалған ғүмере уның һары майҙай етеҙ булды, ул ғүмерҙән Фәүзиә эргәһендәгеләр ҙә бүгеп бөттө, үҙе лә туйҙы. Юҡ, етәр! Башҡаса ул ҡәһәрле көн хәтирәләренә сумыу кәрәкмәҫ! Көсө етмәҫ Барсынбикәнең ул көндө хәтерләргә... Бөгөн уға тыныс. Ошо боронғо һауыт-һабалар, боронғо бүрәнәләр уға быгаса бында йәшәгән кешеләрҙең көсҡеүәтен өргәндәй, уны һаҡлағандай, ҡурсалағандай. Барсынбикәнең һилеккә сарсаған күңеле ахыр килеп ошо йортта тынғы тапҡандай...

— У-у-у! Аһ! — Ҡапыл ишетелгән тауыш семәрле тәгәс тотҡан Фәүзиә-Барсынбикәне һиҫкәнергә мәжбүр итте. Кем йөрөй икән төнө менән? Әллә, — уның йөрәге «жыу» итте — Иҫанбай, улы, булмағайы? Тәҙрәнән урам эсенә күҙ һалды — бер ни күрерлек түгел. Инде ишекте сапсығанмы, бәрелгәнме тауыш ишетелде. Фәүзиә, ҡыуыҡҡыҙ шәмде ҡулына алып, әкрен генә солан ишеген асты. Асты ла аптырап ҡалды: тырышып-серәшеп инергә маташыусы зат эт ине. Күгелйем һыртлы, ҡара йөнтәҫ йөнлө, арығанйонсоған һарғылт күҙҙәре хәс әҙәмсә ҡарай.

— Аһ, аһ!.. Ни кәрәк һиңә, хоҙай ҡунағы? — Эт был һүҙҙәргә ҡыуанғанын, шулай өндәшеү менән бик тә риза икәнен белдереп ҡойроғон болғаны. —



09-2001.p65 120 29.08.01, 12:42
Black

Килгәс, әйҙә, өйгә рәхим ит. Әллә ни һыйым юҡ, шулай ҙа тамаҡ ялғатырлыҡ ризыҡ табырмын. Әйҙә... — Хужабикәнең яҡшы мөғәмәләһенә эт көрһөнөп яуап бирҙе лә, ят йортҡа тәү тапҡыр ингән әҙәм һаҡлығы менән тирә-яғына һынсыл ҡарап, эскә үтте...

* * *

Камалетдинов ултырған көйөнсә йоҡлағанда күргән төшөн башта иҫләй алмай иҫәңгерәп ҡалды. Ҡулындағы ҡәләмде абайлағас, тағы аптыраны: врачтыҡы бит был! Дауаханала ауырыуҙарҙың туҡланыуы ҡәнәғәтләнерлек түгел, тип ялыу менән килгәйне ул. Лидия Николаевна Башкирцева. Ҡуңыр йөҙөндә тәрән күлдәй тонйораған ҡараһыу-зәңгәр күҙле был ҡатын баш табибы Лоҡман Талипович менән һыйыша алмай. Башкирцева өҫтөнән ялыу тотоп Лоҡманы ла бит бик йыш килә. Камалетдинов, туҙынып, был мәрйәнең кәрәген бирәм инде береүгә, тип саҡырта ла, һуғыштың башынан ахырынаса фронттың алғы һыҙығында хеҙмәт иткән медицина майорының зәңгәрһыу күҙҙәренә бер ҡараш ташлауы була — барыһын онота. Бойоғораҡ, хатта үҙенә лә, бөтә донъяға ла битарафыраҡ ҡарағандай күренгән ошо ҡарашты ҡасандыр, ҡайҙалыр күргәндәй була. Хәйер, Камалетдинов был фани донъяла аҙ юл үттеме лә, бәндәнең кемен осратманы...

Бына әле ул Лидия Николаевна ҡалдырып киткән ҡәләмде тотҡан килеш ойоп киткән... Төшөндә ҡыҙы Флориданың койкаһы янына әкрен генә баҫып килде. Ҡыҙының йоҡлаған сағында, эргәһендә бер кеше булмаған саҡта ҡарап торорға ярата Әйүп. Әллә гонаһһыҙ сабыйлыҡ-сафлыҡ тарта үҙенә, әллә шул пак йөҙҙән үҙенеңме, әсәһенеңме алыҫта ҡалған йөҙ һыҙаттарын эҙләй...

— Флорида, ҡыҙым!.. — Әкрен генә өндәшеүенә, ҡыҙыҡай күҙҙәрен асты. Бәй! Ҡара бөҙрә сәсле, зәңгәр күҙле ҡыҙыҡай бит был! Уның Флоридаһы икенсерәк, башҡараҡ... — Кем һин?!

— Һеңлең... Хәтирә! Оноттоңдамы?!

— Хәтирә?! — Әйүп, үҙ тауышына тертләп, уянып китте. — Хәтирә...

Һәм ҡапыл, аяҙ күктән дөрһөлдәгән күкрәү, ҡара төндө ҡап уртаға ярған йәшен кеүек, зиһенендә шул исем йәшнәне — Хәтирә! Эйе, эйе! Бар ине уның һеңлеһе! Бар ине! Уны... Хәтерендә, әсәһенең имсәге шешкәйне. Әсәһе урындыҡта һыҙланып тәгәрәп йөрөй, бала астан илай.

— Астан үлә инде был бала! — Был атаһы тауышы. Шунан өй ҡаршыһына ат туҡтаны. Толопҡа уранып килеп ингән ҡатын биләүҙәге баланы ҡулына алды. Әсәһе, ике имсәген ҡуш усы менән тотоп, иҙәнгә бөгөлөп төштө:

— Ай! Ай, үләм!..

Башҡаһын хәтерләмәй Әйүп. Унан һуң булған ваҡиғалар сылбыры, күрәһең, бала йөрәгенә һыя алмайынса, барыһын онотторған... Ошо хаҡта кем менәндер бүлешкеһе, һөйләшкеһе килеп, Әйүп төн уртаһында ҡатынын ҡуҙғатты. Сымдың теге яғында битараф тауыш ишеткәс, әҙерәк һыуынғандай булды. Шулай шул. Иҫләнә лә ти. Дөрөҫ тә булһын ти. Шунан нимә? Әйүптең генә яҙмышын турағыстан үткәрҙеме был заман? Әйүпкә үҙен донъяға яратыусыларҙан иҫтәлек булып бары бер рәсем ҡалған. Унда — атаһы, әсәһе, өс-дүрт йәштәр тирәһендәге итек буйы ғына Әйүп. Ә һеңлеһе юҡ. Күрәһең, фотоға төшкән саҡта ул әле тыумаған булған. Әйүп ҡарлы-боҙло йылдар аша бары шул рәсемде генә һаҡлай алды...

Графиндан һыу алып эскәс, тыныслана төшкәс, Камалетдинов сәғәткә ҡараны. Өс. Төнгө өс. Ҡәләмде иртәгә хужаһына кире ҡайтарыр. Ҡәләме лә ябай ҡәләм түгел был ҡатындың — тимер көпшәгә ултыртылған. Көпшәһе, моғайын, көмөштөр. Әллә ниндәй семәрҙәре лә, ярыуҙары ла булған ҡасандыр. Эйе, тормош иркәләтмәгәнгә оҡшай уны: юҡҡа рәнйетәлер Лоҡман был ҡатынды.

* * *

Мәҙинә күҙҙәрен асты. Ҡапыл-ҡара ҡайҙа икәнен аңлай алмайынса, тирә-яғына күҙ һалды. Өй эсендә, бүлмәлә ята кеүек ул. Ҙур бер тәҙрә. Шунан төшкән ай яҡтыһы дүртмөйөштәргә бүленгән кеүек бүлмәне йән көсөнә секерәйеп яҡтырта. Дүртмөйөш тигәне... бәй, карауат бит былар! Карауаттар... Шул саҡ Мәҙинәнең ҡуйынында ниҙер йыбырланы. Мәҙинә, һиҫкәнеп, шул йән эйәһенә үрелде: ҡулы йәш баланың ыуыҙ ғына ирендәренә тейҙе. Бала!.. Был бит... Мәҙинә шунда ғына нәғеҙ асылына ҡайты: ул, Мәҙинә, әсә булған. Уның кескәй генә улы бар. Эйе, эйе! Улы! Әптеләхәте, ҡыҙ тыуһа, Нәфисә тип исем ҡушырбыҙ, исеменә оҡшап, нәфис, наҙлы булыр, ә малай



09-2001.p65 121 29.08.01, 12:42
Black

булһа, скрипкасы дуҫы Давид исемен бирербеҙ, ти ине. Мәҙинә сикәһен көйҙөрөп мендәргә тупылдаған йәштәрен һөртөргә уйламаны ла. Ҡуйынында мышнап ятҡан кескәй йән эйәһен — үҙенең йөрәге аҫтында йәнендәй ҡурсып йөрөткән сабыйын — имен күреү бәхетенән аға бит йәштәре. «Эй Хоҙайым! — Мәҙинәнең сарсап ярылған ҡыҙыу ирендәрен көйҙөрөп сыҡҡан был ауазды төнгө йоҡоға талған палаталағыларҙың береһе лә ишетмәне. — Ошо баланы бүләк итеүеңә сикһеҙ рәхмәтлемен! Инде, Хоҙайым, шуның ҡайғыһын күрһәтмә!»

Йәп-йәш әсә ауыҙынан сыҡҡан иңрәүгә оҡшаған был теләк ай нурына йәбешеп бүлмәгә тулған яҡтылыҡ менән күккә олғашты. Һәр хәлдә ул Мәҙинәгә шулай тойолдо. Ерҙә яралған һәр бәндәнең ырыҫ-бәхете Тәңренең ҡулында, тип уйланы ул. Шулай булмаһа, инде үлдем, донъяға тыуып та өлгөрмәгән балам менән бергә яҡты донъя менән хушлаштым тигәндә, күктең үҙенән төшкән кеүек атаһы килеп сығыр инеме? Эйе, эйе! Атаһы — Хашим — Һарайғыр санаһына тейәлгән бесәндең апаруғын юл ситенә бушатты ла Мәҙинәне толобона урап һалып, район үҙәгенә сапты. Ә теге һыңар күҙле һаҡалтай... Эйе, Ишмөхәмәт, бесән тейәлгән икенсе санаға ултырып, ауылға йүнәлде. Ҡыҙыҡ донъя: әллә ҡасан үлгәнгә һаналған кеше ҡайтып төшһөн әле! Бәлки, уның Әптеләхәте лә шулай көтмәгәндә-уйламағанда ҡайтып төшөр?

Шул саҡ бала тынғыһыҙланып ҡытырлай, ирендәрен ҡыбырлатып ниҙер эҙләгәндәй булды. «Имергә һорай!» Мәҙинә ҡулын ыуыҙ тулы түштәренә тейҙерҙе. Нисек, ҡайһылай башларға? Койкаларында тыныс йоҡлаған ҡатындарға ла ҡарап алды. Әлдә уның был ҡаушап, баҙап ҡалған мәлен бер кем күрмәй. Ҡолаҡ остарына тиклем ҡыҙарған Мәҙинә күлдәк иҙеүен асып әкрен генә бер түшен сығарҙы. Ауыртыр микән, бала алыр микән? Әллә һөт еҫен, әллә тән йылыһын тойоуҙан сабый тамшанды, күп тә үтмәй, Мәҙинә күкрәгенән бар булмышына эркелгән татлы дерелдәү, ниндәйҙер йылы ағым үтеүен тойҙо. Сабый йотлоғоп-сәсәп тәғам йыйыу хаҡына тәүге үҙаллы эшен башланы.

Мәҙинә, тулышып һыҙлай башлаған түшенең бушай барыу рәхәтен тойоуҙан кинәнеп, күҙҙәрен йомдо...

* * *

Ихсанбай ваҡиғаларҙың оло юлға сығыуы менән үҙенең файҙаһына ыңғай хәл ителә башлауына шатланып бөтә алманы. Бересенән, бирәйем тигән ҡолона сығарып ҡуя юлына, тигәндәй, Мәҙинәне осратты. Етмәһә, яңғыҙы, ярҙамға мохтаж мәлендә. Ихсанбайҙың үҙенә ярҙам итергә тырышыуын, ташлап китмәүен ул бит ҡасан да булһа баһалаясаҡ! Икенсенән, аты килеп сыҡты. Ауылға ул буш ҡул менән түгел, сана тулы йөк өҫтөндә ҡайтып төштө. Хашим менән тәүге әңгәмә генә күңелен ҡырынҡыраны, уның шайы ғына булыр инде, унан да шәберәк ҡаршы алыуҙы, Ишмөхәмәттең үҙе ҡайтып төшкән хәлдә лә, өмөт итмәҫ ине.

— Атты тапшырыуын тапшырам да... Кем һин?!

— Кем булһа ла, ат менән түгел, яраплан менән дә был һыпат менән алыҫ китерлек түгелмен. Күрәһеңдер: тотош тамғанан ғына торам, — тине Ихсанбай үҙенең ғәҙәти булмағанса ҡыҫылып сыҡҡан тауышы менән.

— Тамғаларың нисауа... Нимә, танкта яндыңмы?

— Булды инде... — Ихсанбай-Ишмөхәмәт тоноҡ хәтәр ятыуҙар һаҡлаған берҙән-бер күҙен ергә төбәне. — Һинең һорашмағаның, минең һөйләмәгәнем яҡшы, Хашим. Минең хәлдә өндәшмәүем көмөш булһа, һөйләшмәүем — алтын.

— Хашим тиһеңме? Мине ҡайҙан беләһең?

— Белмәй, — Ихсанбай, янғындан ҡалған киртек танауын өҫкә күтәрҙе, — Ишмөхәмәтте, еҙнәңде танымайһыңмы?

— Һы... — Хашим ни әйтергә белмәне. — Һы!

— Мин дә һине тере килеш күрермен тимәгәйнем, йә, ярай, һеҙгә ашығыр кәрәк. Һинең менән мин был хәлдә Мәҙинәгә ярҙамсы түгелбеҙ.

— Бесәнде тура нигә... фермаға, — Хашим, атының санаһына менеп ултырҙы ла ҡаты итеп дилбегәне тартты, унан, сыбыртҡыһын болғап, Һарайғырға көсөндө йәлләмә тигәнде белдерҙе. Йөктән бушанған айғыр, шуны ғына көтөп торған кеүек, йәнфарманға район үҙәгенә атылды.

Ихсанбай, йөк башына үрмәләп менеп ултырып алғас, түш кеҫәһендәге документтарын ҡапшаны: барыһы ла урынында. Имен-һау хәрби иҫәпкә тороп, военкоматты алдаһа, янғындан



09-2001.p65 122 29.08.01, 12:42
Black

һуң яңы сүрәткә ингән ҡиәфәте уны ышаныслы һаҡлаясаҡ.

— Эйҙә-ә-ә, малҡай!

Ҡайтыуға тигәндә ылдым хәрәкәтләнгән сана башында Ихсанбай арыған аяҡтарын иркенләп һуҙҙы, күҙ алдына Мәҙинәнең киң асылған ҡара күҙҙәрен, ауыртыныуҙан тешләнеп ҡаны сырҡыраған ирендәрен килтереүҙән, кендек аҫтын һыҙлатып, бөтә тәне буйлап ләззәтле һәм ғазаплы йылы ҡан йүгерҙе.

* * *

Кибеттә һатыусы булып эшләй башлағас, үҙенә беренсе бурыс итеп Рауза атлауын үҙгәртеүҙе ҡуйҙы. Элек, кәнсә йыйыштырыусы булған сағында, уға нисек атлаһа ла ярай ине. Хәҙер ярамай. Ни тиһәң дә уның ҡулына бөтөн Тирәкле ҡарап тора! Ишшу етмәһә, ҡулында — аҫҡыстар. Берәү түгел, тотош бәйләм, унлап булыр. Шуға күрә лә бер аҙ артҡа ҡайҡая, эсен шөйлә алға сығара бирҙе Рауза. Йөрөгәндә лә хәҙер ашыҡмай ул. Ниңә, персиҙәтелдең йомошон үтәргә йүгермәй ҙә ул! Әлбиттә, ҡайһы саҡ ул килеүгә кибет эргәһенә кеше йыйылғылап киткән була. Йыйылһындар. Барыр ерҙәре баҙар түгел. Ашығып, Раузанан былайыраҡ эш ҡыйратып йөрөмәйҙәр әле.

Был юлы ул кибет эргәһендә ике-өс ир, бер ҡатын күрҙе. Һы! Ҡатын тигәне — Ғәлимә. Нишана, күп булһа кисә кибеткә «Сирен» хушбуйы килгәнде ишеткәндер. Былай булғас, уның зафферма менән бутала тигәндәре дөрөҫкә сыға түгелме? Ир тигәндең береһе — үҙенең улы Хөсәйен. Шул, ҡороғор, тартырға ныҡлап кереште. Шулай инде: утыҙҙы үтте, ни бисә, ни һөйөргә бала юҡ. Әпәт ҡайтмай был шул аттары янынан. Тәки шунда ҡуна, шунда йәшәй.

Ирҙәрҙең анау берәүһе, төлкө кәпәслеһе, Хашимдың ағаһысы... Быға ни кәрәк икән? Бисәһе Хөсниямал йөрөй торғайны лаһаң йомош-юлға? Һай, ҡәҙерен белмәйҙәр ҙә инде бәғзе бисәләр ирҙәренең. Ошо тиктем ҡарағайҙай ирҙе кәпрәткә йөрөтөп ҡуя торғаның бармы? Юҡ, эсендә йәне юҡтыр был Хөсниямалдың...

Тағы ике ирҙең береһе Ғәләүгә оҡшаған. Уныһы Ғәләү булһа, икенсеһе Вәләү инде. Ағалы-ҡустылы берәҙәктәр. Ғәләүенә эсергә кәрәк, Вәләүе шуны эсермәйем тип ныҡышып артынан эйәреп йөрөй. Эскән кешене ҡараулап өлгөрөп буламы? Унан һуң, Ғәләү ише үҙ ырыҫына үҙе төкөргәндәр булмаһа, Рауза нисек план тултырыр ине? План тултырыу Раузаға ғына түгел, хөкүмәткә лә кәрәк. Шулай булғас, Рауза быларҙы әбижәйт итергә аслан тейеш түгел! Ана, Хашимдың ағаһы Ҡасим, огоротын уңдырышлы итәм тип йылғанан селәү ташый. Кемгә нимә. Рауза ла: әҙәм ни тиклем күберәк эсһә, ул хөкөмәткә шул тиклем күберәк аҡса тапшыра. Политика был. Ә Рауза, ҡара йәшенән хөкөмәт эшендә йөрөгәс, политиканы яҡшы төшөнә, яңылышмай.

— Һаумы, Рауза апай! Ни хәлдәһең? — Ғәләүҙең бөтәһенән алда сәләмләүе Раузаны һағайтты: был, ҡәһәр,йәнә үтескә эсергә килгән!

— Һаумы, тип, хәлсә инде, Ғәләүетдин ҡустым. Һеҙҙең фатихала. — Шунан ул Хөсәйенгә бороллдо. — Нигә ҡайтып икмәк тә алып китмәйһең?

— Асыҡмайым. — Хөсәйен күҙ ҡараһы шешмә ҡабаҡтары аҫтына йәшеренеп бөткәнсе йылмайҙы. — Һиңә эконом булһын тием...

— Бирермен мин һиңә экономды!

— Ярай, бөгөн ҡайтырмын.

— Ҡасим, нимә, Хөсниямал ҡорҙашбикә ауырып киткән мәллә?

— Юҡ-у-уҡ, бушамай әле ул. Хашимдың донъяһында ҡалған.

— Хашим ҡайҙа? — Эсенән генә буйҙаҡ Хашимды ҡулға төшөрөү теләге менән янған Рауза һиҫкәнеп, ҡалтыранып китте. — Әллә... бер-берәй ергә бисә эҙҙәп сығып киткәнме?

— Ю-у-уҡ, Хашим ни, Мәҙинәне балнисҡа, Таулыға алып киткән.

— Мәҙинәне?! — Рауза көтөлмәгән яңылыҡ ишетеүҙән ҡаушап, ҡалбырҙап китте, йәтеш танауына хатта тир бөрсөктәре бәреп сыҡты. — Мәҙинә тиһеңме?..

— Эйе лә, — Ҡасим торған ерендә калушлы быймалары менән тапанып алды. — Мәҙинәне Хашим бесәндән ҡайтып килгәнендә, Тәрән үҙәктә осраҡҡан и һәм шундуҡ Таулыға сапҡан.

— Ah, ah! У нигә?! — Рауза, донъяһын онотоп, Ҡасим ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙҙе сысҡан аңдыған бесәй иғтибары менән тамһынып күҙәтте. — У нигә Таулыға?

— Әйттем дә һуң балнисҡа тип. Мәҙинәнең теге ни ... көнө еткән булған.

— Ыста-ыста! Кем әйтте быларҙы? Кемдән ишеттең?!

Ҡасим башын күтәреп, бөтәһенә лә күҙ йөрөттө.



09-2001.p65 123 29.08.01, 12:42
Black

— Бәй, ишетмәнеңме ни: Ишмөхәмәт ҡайтып төшкән бит!

— Ишмөхәмәт?! — Рауза, хәбәрҙең ҡолатмалыһын ишеткәс, Ҡасимға йәбеште. — Ысынды һөйҙәйһеңме, буштымы?!

— Ысын... Үҙем күрҙем. Шәңгәрәй ҙә юҡ, Зарифа ҡарындаштың өйөн ҡараштырып сығайым тип барғайным, кейәү... Ишмөхәмәт ултыра.

— А-т-а-а-ҡ! — Рауза Тирәкле тормошонда булһа ла йөҙ йылға бер була торған бындай хәлде үҙ күҙе менән барып күрмәй түҙмәҫен шундуҡ аңланы. — Кәпрәттә кемдең нимә алаһы бар? Йәһәт булығыҙ!

— Кейәү ҡайтҡас, үҙең беләһең... — Ҡасим арлы-бирле тапанды. — Мәҙинәгә лә кәрәк-яраҡ кәрәк. Хөснийамал ҡушты.

— Аһ-аһ, ҡушһа ни, ҡуй, үҙе килеп алыр. Бисәләр йомошон үтәү ирҙәр эшеме?! Уны шикелдегә кеше ирҙе ебәрәме? — Ул йыйылғандарҙың башы аша улына ҡараны. —Һиңә тартырға өйҙә лә бар. Алып ҡуйғанмын. Кит, Хөсәйен, кәпрәт ҡашында сабыуылдап йөрөргә һин Ғәләү йә булмаһа Вәләү түгел. Шулай бит, Ғәләүетдин? — Рауза ашыға-ҡарһалана йоҙаҡты аса башланы. Ҡабаланғанда, йәне сыҡҡыры, бынһыһы ла асылмай. Һиңә кәрәкмәгән саҡта, алланың ҡаты ҡәһәре төшкөрө, бикләнмәй ҙә тороп ҡала!

Ниһайәт, кибет асылды. Рауза бейәләйен сисеп прилавкаға һалды ла, Ҡасим биргән аҡсаға үрелде:

— Теүәлме?

— Теүәл шикелде. — Ҡасим арыбире иткән арала Рауза, ҡулындағы аҡсаларҙы һанап та тормаҫтан, ике яртыны, консерваны шап итеп өҫтәлгә ҡуйҙы. Ыңғайына Ғәләүетдингә лә өндәште. — Миңә бирәсәгең дүрт тәңкә булды, Ғәләүетдин ҡустым. Бурысыңды ҡайтармай тороп, башҡа килеп йөрөмә.

— Дүрт?! — Вәләү ҡаршы төшөргә иткәйне, Рауза әмәлен тиҙ тапты.

— Ашаған белмәй, тураған белә, Вәләүетдин ҡустым. Йә, бөттөмө? — ул Хөсәйенгә бер пачка «Казбек» ташланы. — Бар, бар, тексәйеп тормағыҙ! Алығыҙ бөттө!

Рауза кибетте шартлатып бикләне лә, ҡасан аяҡ баҫҡанын да онотҡан Ишмөхәмәт өйөнә табан осто. Эйе, эйе, осто. Был юлы ул үҙенең яңы уйлап тапҡан атлау-йөрөшөн дә онотто. Бер юлға ярап торор: йәшенән хөкөмәт эшендә йөрөгәс, хәл-ваҡиғаларҙы ул «йүкә телефон» аша ишетеп өйрәнмәгән. Ысвежый көйө үҙ күҙе менән күреп гәзәтләнгән. Уф, Ҡасим һөйҙәп бөткәнсе йәнгенәһе сыға яҙҙы бит. Йә бына, һау кеше күпме ваҡыттан һуң да ҡайтып төшкән, уның Сибәғәткенәһе генә ҡайтмаҫ ерҙә ята. Хоҙай Раузаға мулы менән дәрт биргәнсә, хөрәсән генә булһа ла бер ир йораты бирһәсе! Юҡ шул, насибы юҡ. Хәйерсенең мороно ашҡа тейһә, ауыҙы ҡанай тигәндәре шулдыр. Мына бит Ишмөхәмәт ҡайтҡан — Зарифа юҡ. Бер нәфсеһенә баш буалмай харап булды ул да. Тәүбә, әстәғәфирулла! Рауза уң яурынына ҡайырылып өстө төкөрҙө лә һуңғы ваҡыт Шәңгәрәйҙән башҡа эт тә ишеген асмаған йорттоң ҡапҡаһына үрелде...

* * *

Шәңгәрәй, фермалағы ҡарауылсы өйөнөң тәҙрәләре бик бәләкәй уйылғанға күрә, яҡтылыҡ етмәүҙән күҙҙәрен ҡыҫырға мәжбүр. Эше күп уның. Муйындан. Төндә лә эшләр ине ул, ҡараңғы булмаһа. Туйға әҙерләнә, ҡый, ул. Кемдең тиһегеҙ? Мәҙинәнең. Мәҙинә менән Әптеләхәттең туйына. Аттар әҙер. Һәр санаға икешәр итеп ат егәсәк. Шәңгәрәй мөйөштәге аяҡтарынан бәйләп ҡуйған тараҡандарға ҡарап алды. Иң шәбе — Һарайғыр. Ҡалғандары ла бирешерлек түгел. Сабыш әкәмәт көслө буласаҡ. Шәңгәрәй Һарайғырҙы үҙе егә. Хәҙер, ошо сананы яһап бөтһә... Ул, ҡатыраҡ ҡағыҙ эҙләп, тирә-яғын ҡапшаны. Ыңғайы бер тараҡандарға икмәк валсыҡтарын яҡынайтты: ашаһындар. Туйға бараһы ат ләғир булырға тейеш түгел! Саналар ҙа әҙер. Хәҙер Шәңгәрәйгә аттарҙы егергә лә, туйға барасаҡ ҡоҙаларҙы саналарға парлап ултыртаһы ҡала. Һарайғыр менән Ерәнде мисәп егеп, анауы ҡурғашлы санаға үҙе ултырып алыр: ул «Шәңгәрәй» атлы ҡағыҙ-егетте тотоп, һыйпап ҡараны — матур. Иң матуры! Шулай булырға тейеш тә: ул бит Гөлбаныу йәнәшәһендә ултыра! Бәй, шулай инде: ирлебисәле кешеләр бергә ултыра инде ул. Гөлбаныу эргәһенә (ул ҡағыҙ-кешеләрҙе ҡапшаны) ике малай — Йәнтимер менән Биктимер — ҡунаҡлар. Ә бынау санаға — иң ҙурыһына —атаһы Ишмөхәмәт менән Зарифа эпсәй ултыра инде. Ә үҙенең әсәһе ҡайҙан урын алыр? Туйға барыр өсөн ул яңы күлдәк тектергән, аҡ бийма баҫтырған. Атаҡ, ул ни Шәңгәрәйҙәр санаһына улты-



09-2001.p65 124 29.08.01, 12:42
Black

рыр! Бына шулай. Урын, аллаға шөкөр, етерлек.

Инде бынау кәкере, ҡалдыҡ-боҫтоҡтан яһалған санаға сират. Бында, әйҙә, Ихсанбай менән бисәһе Сәбилә барһын. Ихсанбайға тигән ат та мөсһөҙ булырға тейеш. Ул шулай уҡ аяҡтарынан бәйләп ҡуйған ике ҡандалаға ҡараны: Ихсанбайҙың аты артта ҡалһа, ошо «бүреләр» һөжүм итәсәк. Йә үҙен, йә атын, йә бисәһен ашарҙар. Эй-й-й... бисәһен... ашаһындармы икән? Йә, ҡуй, могайын, теймәҫ уға бүреләр: эт тә һөйәккә ташланмай тиҙәр. Сәбиләне нишләтһен улар? Ә бына Ихсанбайға шул кәрәк: ашаһын бүренән, йәшәмәһен!

Фәүзиә ҡарсыҡ менән Сибәғәткә лә сана әҙерләгән Шәңгәрәй. Тар ғына сана. У-һу-у! Фәүзиә шәл тышынан бүрекме кейгән, таҫтармы ураған. Әкәмәт ҡарсыҡ — ниңә кәрәк булды икән уға былай яһаныу?!. У-у... Рауза килеп илап торасы?! Мин һине ҡайҙа ултыртайым? Етмәһә, Хөсәйен ат бирмәй һенәне ҡоротто... Әйҙә, Сибәғәттең кузлаһына ултыр. Әллә Ихсанбай санаһына күсереп ултыртырғамы? Юҡ, унда ярамай... Бүре ашап ҡуйыр... Һимеҙһең, аяуһыҙ көрһөң, бүрегә ем генә булырһың...

Их ҡына! Бөтәһен дә урынлаштырып бөтөп бара Шәңгәрәй. Инде үҙе ултыра ла, эргәһенә сынъяһау Гөлбаныуҙы балалары менән урынлаштыра и һәм... Атаҡ... Ул ситтә генә мейескә һөйәлеп торған оҙонтораҡ һынға ҡараны.

— Һин ниместәп тораң, Хасим?!

— Туйға барырға сыҡтым да...

— Аһ-аһ... Ҡайҙа ултыраң инде?!

— Санаға.

— Кем янына?

— Гөлбаныу янына.

— Ҡуҡыс һиңә! Гөлбаныу минең менән ултырған!

— Ул минең законный бисәм.

— Булһашы?! Мин уны һинән бер яртыға һатып алдым да инде?!

— Кит, Шарик, тай бынан!

— Ы!

— Кит тиҙәр! Төс!

— Мына! — Шәңгәрәй тоҡос бармаҡтары араһынан шулай уҡ тоҡор ғына, байтаҡтан йыуылмаған ҡуҡыш шәрәмәте сығарҙы. — Мына!

Шул саҡ ишек бәләкәй булғанлыҡтан шаҡтай иңкәйеп-кәкерәйеп, март ҡояшы тышта алып ҡалған күҙен ҡыҫа төшөп, Хашим үҙе килеп инде. Башта ул ҡараңғы мөйөштә тараҡандар менән булышҡан Шәңгәрәйҙе сырамытмайыраҡ торҙо.

— Фу... бер нәмә күрерлек түгел. Шәңгәрәй?

— Ҡышҡырма... атты өркөтәң!

— Ат һиңә атаң башын! Шәңгәрәй! Яңылыҡ бар бит әле һиңә, эй!

— Яңылыҡ кәрәкмәй миңә!

— Әләйһәң... һөйөнсө!

— Һөйөншөһөнә — тараҡан бото!

— Минең Мәҙинәм ҡайтты, Шәңгәрәй! Әле балниста. Ә һинең, Шәңгәрәй, атайың. Ишмәмәт... Ул ҡайтты...

### *Өсөнсө бүлек*

Мәҙинә өйөнөң ишегенән ингәс, биләүҙәге йәш балаһын ҡайҙа һалырға белмәгәндәй, аптырап ҡалды. Ҡайһылай кес кенә, үтә лә тар ғына, тәпәш кенә булған икән уларҙың өйө. Ошонда өләсәһе, әсәһе, ике ҡустыһы, атаһы йәшәнеләр бит! Урындыҡ, һике, мейес, өҫтәл, ишек төбөндә — бүкән. Элек тәҙрә төптәрендә гөлдәр ине, хәҙер юҡ инде улар. Берәүһенең генә һауыты ултыра, күрәһең, иң һуңынан ҡороғандыр.

Ишек буйындағы стенала шаршау ҙа юҡ, гөмүмән, ҡатын-ҡыҙ ҡулы тейгән нәмә күренмәй. Стеналағы ҙурайтылған рәсемдән башҡа бында яңылыҡ юҡ. Ә рәсемдән уға әсәһе менән атаһының йәшлек, дәрт, сәләмәтлек бөркөп торған йөҙҙәре ҡарай. Әсәһе боронғо башҡорт ҡыҙҙары кейемендә. Мәҙинә уларҙы әле лә үҙенән ҡалдырмай алып йөрөй. Эйе... Оҡшаған Мәҙинә әсәһенә. Фотоһүрәттә — бигерәк тә. Тормошта әсәһенең күҙҙәре зәңгәрһыу-һорғолт ине. Ҡап-ҡара керпектәр менән ҡаймаланған бындай ғәжәйеп күҙҙәрҙе Мәҙинәнең ҡабат осратҡаны булманы ла. Ә атаһы үҙенең фронтта төшкән фотоһын ҙурайтҡан. Әсәһенең күҙҙәре аҙашҡан болан балаһыныҡылай, атаһының ҡарашы уйсан, ҡырыҫ...

— Әйҙүк, ҡыҙым... — Ҡасимдың ҡатыны Хөсниямал ҡулдарын балаға һуҙҙы. — Аталарына, Мәҙинәне үҙебеҙгә апҡайтайыҡ балнистан тиһәм, ризалашманы, уның үҙ нигеҙе, үҙ тайсаһы бар, тине лә ҡуйҙысы...

— Рәхмәт, былай ҙа күпме мәшәҡәт яһаным, — балаһынан бушанған ҡулдары менән Мәҙинә бутыйының төймәләрен ысҡындыра башланы. — Йыуғанһығыҙ өйҙө, йылытҡанһығыҙ...

— Эй, уныһын! — Инәһе йән эйәһен урындыҡтағы мендәргә һалды ла, баланы ауыҙландырырға әҙерләп ҡуйған

ҡалаҡтарға үрелде. — Быныһы — бал, быныһы — май! Балдай татлы телле, майҙай йомшаҡ холоҡло бул, балам!

Ул арала ишектә күршеһе Мәһинур күренде:

— Аһ-аһ! Иртәнсәктән бирле көттөм, инде бәләкәй ятып торайым тигәнсе... Аһ-аһ! Мәҙинә, ҡыҙым, һаумы?!

Игелеген күп күргән Мәһинур күршеһен күргәс, Мәҙинәнең күҙ йәштәре үҙенән-үҙе атылып сыҡты.

— Бына, апай... Мин тағы... яңғыҙмын.

— Улай тимә, ҡыҙым, атайың бар.

— Эйе, эйе, — яулыҡ осо менән алмаш-тилмәш күҙен һөрткөләгән Хөсниямал да һүҙгә ҡушылды. — Аталары ла шулай ти. Бәндә хөкөмө нимә ул? Ана, Хоҙай ҡушҡас, ни рәүешле имгәнгән булһа ла Ишмөхәмәт тә ҡайтып төштө. Ризығы бөтмәһә, ҡайтыр Әптеләхәт кейәү ҙә.

— Ҡуй, — Хөсниямал инәһе унның ҡаршыһына баҫып яйлап ҡына тун төймәләрен ысҡындыра башланы. — Сабырһыҙланма, һин бит хәҙер әсәй булдың. Әсә кеше сабыр була ул. Гөлбаныуҙың сарбайҙанып башын ташҡа бәргәнен күргәнең булдымы? Бына кеше! Бөтөн хәсрәтен, һағышын эсенә йомған көйө китте донъянан. Ауыҙына тулған ҡара ҡанды ла кеше алдында төкөрмәне бит ул. Һинең хәҙер йөрәгеңә баҫыр балаң бар. Хоҙай шунының һауҙығын, тәүфиғын бирһен!

— Эйе, эйе... — Мәһинур Мәҙинәне урындыҡ ширлегенә ултыртты. — Мына мине алып ҡара: өйөм бар, бабайым бар, мал-тыуарым етерлек, балам юҡ. Анау бабайға бер-бер хәл булһын — япа-яңғыҙ ҡалам бит! Эй, Мәҙинә, Хоҙай йән биргәнгә йүн бирә, илдә сыпсыҡ үлмәй. Ҡайтырыңды шулай ныҡ көттөм, ҡиәмәтлек әсәй итеп алһаңсы мине, балам?!

Мәҙинә, урындыҡ ширлегенән әкрен генә шыуып төшөп, күҙҙәренән сөбөрләп йәш аҡҡан башын Мәһинурҙың алдына һалды:

— Ах, Мәһинур апай!..

* * *

Рауза Ишмөхәмәтте был тиклем ҡиәфәттә күрермен тип уйламағайны.

— Атаҡ-атаҡ... — ул инде лә усаҡ ҡаршыһында ут яғып булашҡан һыңар күҙле, йөй-йөй булып сөрөшкән йөҙлө кешегә ҡарап шаҡ ҡатты. — Тәүбә-әстәғәфирулла тип әйтәйемме... Һинме был, Ишмөхәмәт?

— Үт, Рауза... ни... күрешәйек... — Ишмөхәмәт, бер яҡҡа ҡыйыш уңалған биле яҙылмағанлыҡтан ыҡтыра баҫып, Рауза ҡаршыһына ығышты. — Бына... әҙәмде йәнтәслим гәрипләмәһә һуғыш тимәҫтәр ине уны...

— Аһ, аһ! — Рауза устарында Ишмөхәмәттең һалҡын, дерелдәберәк торған ҡулын тойҙо. Был тиклем дә һалҡын ҡул суғын тәү тапҡыр ҡыҫыуылыр унның. Әйтерһең дә кеше түгел, яңы-юры ғына ҡәберҙән һөйрәлеп килеп сыҡҡан өрәк...

— Һый тәҡдим итә алмайым, ни... гәфү ит, Рауза. Ауылда ниндәй хәлдәр бар? Үҙегеҙ нисек йәшәйһегеҙ.

Иҫенә килә төшкән Рауза бүкәнгә ултырырға самалап ҡараны ла, ултырышын һыйҙыра алмаҫтай булғас, туры үтеп, ширҙеккә ялпашты.

— Беҙ ни... тере йәнгә ни... ризығы ла, монаяты ла табылып тора. Хөснулла һаман шул атта...

— Килен алманыңмы?

— Килен!.. Килен алыу түгел, мунса төшөрөргә аттарынан айырып алып ҡайтып булмай. И һәм үҙем дә килен йомошап, һәндерәлә ятыр йәштә түгелмен. Йәштәй генә таптым да инде мин, Ишмөхәмәт, Хөснулламды. Күп булһа, егерме ете өҫтөндә буғанмындыр. И-и-и... какуй һиңә егерме ете, уҙа барһа егерме биш тирәһе буғандыр?..Ә?

— Үҙең һуң ҡайҙа эшләйһең? — Бер нәмәне сәйнәй башлаһа сүбәккә әйләндермәй туҡтамай торған холҡон белгәс, Ихсанбай-Ишмөхәмәт һорау бирергә ашыҡты.

— Үҙем ни... Атаҡ, яңы ҡайтҡас, ишетмәһәң ишетмәгәнһеңдер шу. Мин ни... Ишмөхәмәтулла ҡорҙашбай, бик һур кеше булып киттем бит! Сәүиткә рәхмәт, бартияға рәхмәт: ҡатын йортон ныҡ үҫтерҙе, гәләмәт күтәрҙе. Вис вули ҡуйҙы. Йә, мин кем инем? Анау шаҡшы, ҡәберендә лә тыныс ятмағыры Ихсанбайҙа убыршица инем!

— Хәҙер кемһең? — Башына әҫе ҡабып, ҡолағы шаулай башлаған Ихсанбай-Ишмөхәмәт һаҡалын семтекләп ҡыҙып яна башлаған ут ҡаршыһына сүгәләне.

— Атаҡ, шуны әйтәмсе, хәҙер кем икәнемде. Мына... тәртипте йәшәгәс, Хоҙай насип итеп, бартияһына инеп киттем. Бартияға ингәс, эш хутка китте, кем, Ишмөхәмәтулла ҡорҙаш: кәпирәт ағзалары мине һатыусы итеп үрҙәтте лә ебәрҙе! Әлдә теге йәне йәһәннәмгә киткере пельменной Ихсанбайҙан ышшут тартырға өйрәнеп ҡаған-



09-2001.p65 126 29.08.01, 12:42
Black

мын! Һөнәрһеҙ ҡыйын булыр ине күтәрелеүе. Һөнәре буһа, мужет, һинең дә Зарифаң Ихсанбай менән йәбешешеп көн-төн уйнаш итеп ятмаҫ ине. Эштәп ашар ине. Өҫтәренә, тәүбә әстәғәфирулла, үҙем килеп сыҡтым бит! Бахыр Шәңгәрәйендән эт яһап ҡуйғандар ҙа уйнашҡа керешкәндәр, мин һинә әйтәйем! Башҡынаһы йоп-йоморо булып, шаулап өрөп торған була байғош. Ихсанбай, тамуҡтың ҡыҙыуында янғыры, шәп-шәрә килеш, көпә-көндөҙ Зарифаны баҫтырып йөрөй.

Урынында ултырып сыҙай алмай, ах та пых килгән әңгәмәсеһенә иғтибар ҙа итмәҫтән, Рауза һүҙен дауам итте:

— Мына шулай ул, ҡорҙашбай, донъя — ҡуласа, йә мына һин әйт әле, үҙең донъяға бар ҡылған балдарҙы үҙ ҡулың менән үтерә алыр инеңме?

— Кит, юҡты!.. — Тәненән һыуыҡ тулҡын үткән Ихсанбай бөрөштө, арҡа мейеһенең өшөүен ныҡлап ҡыҙған усаҡ йылыһы ла йылыта алмай.

— Юҡты! Бер ҙә юҡ түгел. Малайҙарҙың һөйәге быяаса табылыр ине инде — табылманы. Шул ғазрайыл ғына ҡумырыҡҡа тыҡҡан уларҙы. Бөтөн ауыл шулай һөйҙәне. Ихсанбай ошо көн тере буһа, биллаһи, таш менән бәргестәп үлтерерҙәр ине!

— Юҡты.. Ихсанбайҙың ул... сабыйҙарҙа ни үсе булһын?!

— Аһ-аһ! Как рас шуны әйтеп утырамсы: игеҙәктәр бит... Гөлбаныу мәрхүмәкәйҙең сабыйҙары... шул инәһен эт йыҡҡыр Ихсанбайҙан буған бит! У-у-й! Тылда ҡаған ирҙәр бисәләрҙән күп көлдө! Ихсанбай, бәдбәхет, бөтәһенән арттырҙы!

— Һин үҙең һуң... — Ихсанбай, асыуын йәшерергә була, тәмәкеһенә көс төшөрҙө... — Үҙең...

— Аһ-аһ! Миңә ни булған? Мужет, мин сыҡмаҫ та инем. Мужет мин Хөсәйенемде үгәй күҙенә ҡаратып утыртып ҡуймаҫ та инем: минең ише сиртһәң ҡаны сыҡмалы бисәләргә ирҙәр хут бирәме әллә у?! Эйе, итәки хут бирмәнеләр, тимерсе Сибәғәтулла, ауыр тупрағы еңел булғыры, һората килде.

— Һората?!

— Атаҡ, үҙенә бисәлеккә һораны! Эйе!

— Нигә.. уның... ҡарсығы бар ине бит?

— Юҡ ине! — Рауза, япмалы итәгенең эс яғын әйләндереп, ебей башлаған үтә лә ыҡсым танауын кинәнгәнсе һеңгерҙе.

— Булмай ни... Фәүзиә ҡарсыҡты кем белмәй?

— Улар ни бергә йоҡтаманы бит! Бергә йоҡтамағас, у ниндәй бисә булһын?! Сибәғәтулла байғошом үҙе әйтте миңә. Бергә йоҡтамағас, у нимәгә ир занимать итеп йәшәргә?! Ә?!

Төпсөгә ҡулын бешерә башланымы, Ихсанбай тәмәкеһен утҡа ырғытты.

— Фәүзиә ҡарсыҡ... Сибәғәт... ағай.... иҫәндәрме? Ихсанбайы ҡайҙа?

— Атаҡ... берәү-бер яҙманымы? Вис үлеп бөттө бит улар! Вис! Исмаһа, Сибәғәтуллам тере ҡалманы! Фәүзиәһе лә, Ихсанбайы ла, Сәбиләһе лә... Уй... ул көндө һин һорама, ҡорҙаш. Зарифаң да шу төндө юҡ булды. Бөтәһен бер төн эсендә ер упты! Ихсанбайҙың өй урынында көл-күмер хәҙер. Әҙәм унда яҡын барырға ҡурҡа! Һинең Шәңгәрәйең әйтә: төн буһа шунда апаҡтан кейенгән Фәүзиә сығып ултыра, ти. Көл араһын соҡоп, Йәнтимер менән Биктимерҙең һөйәктәрен эҙҙәй, ти... үәт!

— Эске килә, Рауза.

— Аһ! — Рауза ҡуйынынан ярты сығарҙы. — Эсеп йөрөгән бисә түгемен. Ну һинең ҡайғыңды уртаҡташырға тип һалып алдым. Эс, Ишмөхәмәт, Шәңгәрәйҙе табып апҡайт. У бахыр һинһеҙ йонсоно, ней анау Гөлбаныуҙы онота алмай. Мына: ҡарап торһаң, сей алйот бит. Был ғишыҡ уты тигәнең алйотто ла аямай икән ул, ә?!

* * *

Үҙенән һуң кәнфит-перәник, тағы әллә ниндәй тәмле еҫтәр ҡалдырып Рауза сығып киткәс, Ихсанбай тышы ҡайышҡаҡланып бөткән ҡолаҡсын мендәргә янтайҙы. Эй-йе... Ихсанбай был өйҙә, буйлы балаҫ түшәлгән ошо урындыҡта аҙ ләззәтле төндәр кисермәне. Уйлап ҡараһаң, Зарифа уға башҡа бер ҡатын-ҡыҙ бирә алмағанды бирҙе. Бүтәндәр менән уның мөнәсәбәте нисектер урыҡ-һурыҡ, ваҡытлыса булды. Ә Зарифа... Әлбиттә, Ихсанбайҙың Зарифаға ҡарашы Гөлбаныуға булған мөнәсәбәтенән дә ныҡ айырылды. Гөлбаныу уның өсөн эсентышын көйҙөрөп-өтөп барған хистойғо ине. Уның менән Ихсанбай тик бер тапҡыр яҡын булды, бары Гөлба-

ныуҙың ҡурҡыу һәм ғазап менән ялбарған күҙҙәрен, телендә уның ниңәлер тоҙ тәм иткән ирендәрен тойҙо. Гөлбаныу тәне менән үҙ тәненең тоташыуын кисереүҙән Ихсанбай үҙе лә тотош ут-ялҡынға әйләнде, ете ҡат ер менән ете ҡат күк тоташып, ахыр сиктә ялҡындан ғына торған күсәр ҡалды.

Юҡ! Зарифаға ул был дәрәжәлә көслө тартылыу кисермәне. Әммә... Зарифа уның ирлек нәфсеһен ҡәнәғәтләндерер өсөн нимәләр генә эшләмәне. Ихсанбай тәненең һәр күҙәнәген йоҡоһонан уятыр, мәле менән Ихсанбайҙан тотош теләктән торған ғифрит яһау ҡөҙрәтенә эйә ине Зарифа! Ихсанбай үҙенә самаһыҙ ауырлыҡ килтергән саҡтарында ла түҙем булды Зарифа. Бахырҙың тешен ҡыҫып ыңғырашҡан ауазы Ихсанбайҙы оторо ярһытыр ине, унан аяуһыҙ һәм бәғерһеҙ бер арлан яһар ине. Шул саҡтарында ла, Ихсанбай киткәндә ит киҫәге хәлендә ятып ҡалһа ла, уның икенсе килеүен ҡояштай балҡып, сайҡалып торған тулы түштәренән хушбуй еҫтәре аңҡытып, йөҙөн тулған айҙай балҡытып ҡаршы алыр ине.

Эй тормош! Ана хәҙер уның һөйөктәре ҡайҙалығын этем дә белмәй. Әгәр теге ҡәһәрле төндө Ихсанбайҙың юлына ҡаршы сыҡмаған булһа, хәҙер ни булыр ине? Ул, моғайын, Ихсанбайҙы шундуҡ таныр ине. Кем-кем, ул яңылышмаҫ ине.

Рауза Шәңгәрәйҙе табып алып ҡайт ти бит әле! Ниңә кәрәк уға ул диуана? Ене һөймәгәне элек-электән шул Шәңгәрәй булды. Шул сусҡа хәҙер Ихсанбайға атай тип өндәшергә тейешме? Ул тиклемде нисек күтәрер Ихсанбай?!

Рауза сығып киткәнгә хәтһеҙ ваҡыт үтте, Ихсанбай тәҙрә янына килде, алыҫта ятҡан тау һырттарына ҡараны. Эйе, уны ике йылға яҡын йәшереп тотҡан Күктау артта ҡалды. Бынан ул тау һыҙаты булып ҡына төҫмөрләнә. Үҙәккә үтерлек яңғыҙлыҡ, һалҡынлыҡ шунда ҡалды. Хәҙер инде бәйләнһәләр ҙә бер уның документтарына ғына бәйләнерҙәр. Ә, бәлки, бәйләнмәҫтәр ҙә: кеше һыпаты ҡалмаған был ғәриптең тормошон төпсөнөүҙең кемгә кәрәге булыр икән?

Эскән араҡы үҙенекен иттеме, Ихсанбай ҡарынының бүренекелэй асығыуын тойҙо. Тоҡсайынан бурһыҡ ите алды. Ҡаҙандағы һыуҙың ҡайнап сыҡҡанын да көтмәй, тамыр тәм иткән һыуыҡ ит киҫәген сәйнәргә кереште...

* * *

Төнө буйы ашап инде һыуһаған аттар Хашимды тыныс, ләкин ҡыуаныслы кешнәү менән ҡаршы алды.

— Эскегеҙ килдеме, малҡайҙар? Хәҙер... — Хашим, береһен меңеп, икенсеһен етәкләп, Тәңребирҙе кисеүенә төштө.

Хашимдың эше ферманы ҡарауыллау булһа ла бесән ташыу йыш ҡына уның елкәһенә төшә. Фермала мал ҡараған Йәғәфәр менән Сәйғәфәр — Хашимдың ике туған ҡустылары. Хашимдың күндәм холҡонан файҙаланып, әлдән-әле яңы сәбәп табып, был мәшәҡәтле эштән янтайырға ғына торалар. Быларҙың хәйләһен аңлап торһа ла, Хашим ҡарыулашмай — сит бауыр түгел, үҙ туғандары, нисек итеп Мирхәйҙәровтан һүҙ тейҙертәһең? Унан һуң, ферма мөдире Саяф та, Ишмөхәмәттең ҡустыһы, йомаҡ кеүек йомоҡ бер зат. Ағаһының юғалыуының да, Зарифа менән уның бәйләнешенең дә үсен Хашимдан алғандай. Зарифа менән Хашимдың бер ҡарындан тыуһалар ҙа асылда ҡапма-ҡаршы холоҡло булғандарында уның эше юҡ. Хашим ҡарамаҡҡа һылыу, ләкин еңел холоҡло апайының айышына үҙе лә төшөнә алманы. Килке-килке хәтеренә төшкән, зиһене ҡапыл яҡтырған мәлдәрҙә Зарифаны яңынан күргәндәй, низер һорағандай була — мәгәр ул юҡ. Ихсанбайҙы, Фәүзиәне упҡан төн уның апайын да йотто, зым-зыя юҡ булды бит Зарифа.

Хашим ике санаға ике ат егеп, толобона уранып ултырып юлға сыҡҡанда ла кистән йөрәген шомло һыҙланыу менән ҡыҫылырға мәжбүр иткән уйҙарынан арына алманы. Нәфсеһенә ирек ҡуйып, типтереп тә йәшәп ҡараны, зил-зилағә бәрәбәр һуғышын да үтте, мөхәббәттән дә, һағыштан да ауыҙ итте — мәгәр барыбер үҙен дә, кешеләрҙе лә, донъяны ла, йыһанды ла аңлап бөтөрә алманы. Кисә генә Мирхәйҙәров менән һөйләшкәне ҡолаҡ төбөндә.

Күптән түгел иртәнге нарядтан һуң алып ҡалды уны председатель. Тәмәке тоҡандырҙылар, икәү-ара оҙаҡҡа һуҙылған тынлыҡты Мирхәйҙәров боҙҙо:



09-2001.p65 128 29.08.01, 12:42
Black

— Ҡыҙыңдан хәбәр бармы?

— Мәҙинә яҙып тора.

— Ә кейәүең...

— Ул да яҙа... былай. — Яуаптың Мирхәйҙәровты һиҫкәндереүен тойҙо Хашим. — Нигә, әллә... кейәү хат яҙмаҫлыҡ кешеме?

— Түгел... — председатель төпсөгөн ҡара тәмәке һауытына баҫты. — Былай ғына. Үҙеңдең һуң... өйләнеп ебәрергә уйың юҡмы?

Һорауҙарҙың тиктәҫкә түгел икәнен һиҙенгән Хашимдың түҙеме етмәне:

— Быныһын да өҫтән һорарға ҡуштыларmы? — Һарыуы ҡайнай башлаған Хашим Мирхәйҙәровҡа туп-тура ҡараны. — Һораһалар әйт: ҡыҙыу, бисә туҡмай торған гәҙәте бар — тормош ҡорорға һәләтле түгел тиң.

— Ҡуйсәле, Хашим... Мин бит... былай ғына, дуҫтарса.

— Түрәнең... дуҫы буламы?

— Әпәт бер балыҡ башы. — Мирхәйҙәров тамаҡ ҡырҙы ла ике ҡулын өҫтәлгә ҡаушырып, Хашимға төбәлде. — Ҡыҙыҡ кеше һин, Хашим. Партияға ла инмәйһең, яуаплы эштән дә ҡасаһың... Оло башыңды кесе итеп, Шәңгәрәй кеүек иҫәр менән бәйләнәһең... Аңламайым мин һине!

— Йыһанда күпме йондоҙ бар, Азат? — Мирхәйҙәровҡа элеккесә исеме менән өндәшеүенән оялғандай булды Хашим, ләкин һуң ине.

— Аны кем һанаған... Һин һүҙҙе ситкә борма.

— Бормайым. Как рас шуны әйтмәксемен, иптәш председатель. Ниңәлер бер кем дә йондоҙҙарҙы бер сафҡа теҙеп маташмай.

— Һы... йондоҙҙо нисек... сафҡа теҙәһең?!

— Бәй, шулай булғас, нигә әҙәмдең барын бер төрлө итергә тырышаһығыҙ?! — Шулай тине лә Хашим, сығып китте. Мирхәйҙәровтың ҡара ятыуҙай ялтыр күҙҙәрендә асыу тоҡанып, ҡаҡса бите ризаһыҙлыҡ белдереп тартышып ҡалды. Шул инде... бер нәмәне ишетеп, һиҙеп төпсөнмәксе булған ул. Хәҙер бына Мәҙинә ҡайтып төштө.

Таң яҡтырған һайын һирәгәйә барған йондоҙ күселәй, Хашимдың да уйҙары көн яҡтырған һайын бер һағышҡа, бер ут-ялҡынға төйөрөлдө. Ай һағышын кисен Зөһрә тип, иртән Сулпан атаһалар, Хашим һағышының исеме бер генә — Гөлбаныу. Бына ул хәҙер шул һағыш, Хашимды хәтерләүҙәр аша ла тетрәнергә мәжбүр иткән асыл һөйәктәр һаҡлаған ҡәбер янынан үтәсәк. Йөрәгенең тулҡынып тибеүенән, тамағына тығылған төйөрҙән Хашимға эҫе булып китте. Ул, толобон һалып, санаһына турайыбыраҡ ултырҙы, һөйгәне менән тәүге осрашыуға барған үҫмер кеүек ҡыланғанына йәне лә көйә үҙенең. Ҡырҡҡа етеп килгән ир ҡылығымы был?! Әммә, нишләмәк кәрәк, йөрәккә бойороп булмай.

Хашим, хужаһының уйға сумыуынан файҙаланып үшәнләнә төшкән атының дилбегәһен ҡағып, тәртә араһында яткан сыбығын ҡалҡытты:

— Әйҙә, малҡайҙар!

* * *

Ағаһының мал аҙбарҙарына терәтеп һалынған малухаһының берҙәнбер тәҙрәһендә баҙнатһыҙ йылмайып ҡышҡы таң һыҙылды. Тәҙрә бәләкәй, шулай ҙа ҡылау-ынйылар менән семәрләнгән быялалар эленән-эле яҡтыра, бихисап төҫтәр солғанышы менән баҙлай-баҙырай бара.

Үҙен тышҡы донъя менән бәйләгән ошо бәләкәй тәҙрә аша яңы көн тыуыуын күҙәтеү Сәбиләнең күптәнге гәҙәтенә әйләнгән. Ошо быялаларға төрлө төҫтәр булып яғылған ҡояш күп тә тормай бауыр ҡалҡытты һәм бар донъяны ҡосағына ялманы. Ошо рәүешле, хәстәрле әсәләй, көн оҙонона көллө үҫемлекте, кеше, үрсем-йәнлекте үҙ нурында ҡойондорғандан һуң, кискә табан арып, тонйорап, хәлһеҙләнеп, тауҙар һыртына салҡан төшә. Сәбилә лә әсә. Тырыша-тырмаша, сөрәшә-көрәшә торғас, ул да, ниһайәт, әсә булыу бәхетенә ирешә. Ҡарындан айырылып, донъяға үҙенең барлығын хәбәр итеп ҡысҡырған сабыйы тауышын ишеткән минуттары!.. Ул, бына ошо илаһи яҡтылыҡ сығанағы кеүек сабыйымды, Әбүбәкеремде, ғүмерем буйы иркәләрмен, наҙлап уятырмын, наҙлап йоҡлатырмын, тип хыялланғайны. Ләкин ул Әбүбәкерҙе был донъяға табып ҡына бирҙе, тыуҙырыу менән уны ағаһының ҡатыны тартып алды. Дөрөҫ, башта малайҙы имеҙергә индерҙеләр. Таш аласыҡтың ошо берҙәнбер тәҙрәһенән Сәбилә еңгәһе Рәшиҙәнең аҡ төргәккә ураған танһыҡ бәпесен сығарғанын күҙәтте. Малай башта йоҡлай торғайны. Алһыу ирендәренә төртөлгән имсәкте үжәт кенә, теләмәй генә ауыҙына ала. Артабан, шәрбәт



09-2001.p65 129 29.08.01, 12:42
Black

тәм иткән йылы һөт ирендәрен сылатҡас, ҡапыл һиҫкәнеп, йотлоғоп-ҡарһаланып һура башлай. Илап туйғас, уны ике ҡатын — Сәбилә һәм Рәшиҙә — береһенән-береһе һаҡсыл хәрәкәттәр менән кире юрғанына урайҙар.

Сәбилә ошо бәхетле минуттар өсөн дә Хоҙайға гел шөкөр итте. Оло йортта балама яҡшыраҡ, яҡтыраҡ, йылыраҡ, эргәһендә бала бағыусы ла бар, шулай ышаныслыраҡ, тип үҙен йыуатты. Әммә... Әбүбәкер шулай йоҡлай-йоҡлай, талсыға-тала имә торғас, бер мәл холҡон үҙгәртергә булып китте: ҡапыл имеүенән туҡтай ҙа, имсәкте ысҡындырыбыраҡ тора, геүләп әсәһенә һүҙ ҡуша, йылмая, тешһеҙ ирендәрен йәйелдереп көлөп ята.

—Тәүбә-эстәғәфирулла! Былай булһа, ул мәңге туймаҫ! Был таш ҡапсыҡта үпкәһенә һалҡын тейҙергәнсе ятыр!

Еңгәһенең ҡылығын Сәбилә үҙенсә аңланы:

— Эйе лә баһаң... Баланы минең... үҙемә инеп имеҙеү кәрәк!

— Тәүбә-эстәғәфирулла! Ағайың ишетеп ҡалһа! — Еңгәһе ҡото алынған бер ҡиәфәттә ишеккә ҡараны. — Һин — бала имеҙергә ялланған ҡатын. Онотма шуны!

— Онотманым да ул... — Сәбилә ҡолаҡтарын яндырып ҡан йүгереүен тойҙо. — Онотманым...

Рәшиҙә әсәһе итәгендә имеп-иҙерәп ятҡан сабыйҙы ҡапыл ынтылып ҡулына алды ла юрғанына урай башланы. — Улым ҙур үҫте инде... хәҙер һыйыр һөтөнә күсһәк тә бирешмәҫ...

— Еңгә-ә! — Сәбиләнең аҙарынып, сикһеҙ иңрәп өндәшкән тауышы ишектең ҡаҡлығып ябылыу тауышына күмелде.

Ул саҡҡа ла байтаҡ ваҡыт үтте. Мәгәр таң атҡан һайын Сәбилә ошо тәҙрә эргәһенә килеп баҫа. Баҫа ла ҙур өйҙөң ишеге асылыуын, унан аҡ юрғанға уралған ҡәҙерле йән эйәһен алып сығыуҙарын көтә...

* * *

Атаһы өрләктәге сөйгә элгән сәңгелдәккә башлап һала улын Мәҙинә. Ҡыйыҡ эсендә торған был бишек заманында Мәҙинәнеке булған, унан һуң ике ҡустыһын тирбәлткән. Сәңгелдәктең төбөнә тегелгән сепрәктең серемәүен эйт әле! Мәҙинә уға яҡшылабыраҡ ҡараны: бәй, был бит... ҡылдан һуғылған. Быны яһаған кешенең башы эшләгән: ҡыл бит һыу тотмай. Ах! Әсәһе әйткәйне лә инде! Был бит уның, әсәһенең, бишеге! Шәһәрбаныу өләсәһенең ҡыҙы Гөлбаныу өсөн эшләткән сәңгелдәге был! Ул, ул...

— Бисмиллаһи... — Түштән айырылған сабый имеп ятҡандағы кеүек ирендәрен һурып алды, мәгәр күҙен асманы. — Йоҡла, улым, бишегеңдең дүрт мөйөшөндә дүрт фәрештәң ҡурсыһын йоҡондо.

Йәш балаға ҡағылышлы тағы нимәләр белә ине әле Мәҙинә? Ә... бысаҡ! Ҡырҡы тулмаған баланы яңғыҙын ҡалдырып тышҡа сығырға тура килһә, сабый өҫтөнә бисмилла әйтеп бысаҡ һалыр кәрәк. Юғиһә...

— Инергә яраймы? — Сәңгелдәктең ҡорғаны ышыҡлап, Мәҙинә инеүсене тиҙ генә күрә алманы.

— Инегеҙ, инегеҙ! — Мәҙинә ҡаршыһында таныш, ләкин... — Һин?! Ғәлимә?! Кит, әй, башҡа ерҙә осратһам, танымаҫ инем!

Кәүҙәгә йомороланып, ит ҡунып киткән Ғәлимә Мәҙинәгә ике ҡуллап килеп күреште:

— Ә һин... шул көйөһөң. Әллә инде тағы ла матурая төшкән?!

— Ҡала ҡаласы килешкәндер... Шунан? Нисек йәшәйһең? Тормошҡа...

— Ҡыҙ үҫтерәм! — Ғәлимә бер тын алыуҙа быны әйтте лә шиңгәндәй булды. — Һәр кемгә лә... райондан килгән түрәләр тәтемәй бит...

— Нигә улай тиһең? Ә кемгә... сыҡтың?

— Сыҡманым. Эй әхирәт... Һин бәхетле. Ҡулға алынһа ла, һинең балаңдың... законный атаһы бар.

— Һәр бала үҙ ырыҫы менән тыуа, әхирәт. Эшләйһеңме? Ҡайҙа?

— Ҡайҙа булһын — фермала! Һыйыр һауам! Эй әхирәт! Һин дә кил фермаға! Эй, һин кәнсә йә клуб тирәһенә барырһың ул. Мәскәүҙәрҙә уҡыған кеше ни!

— Эштең... ниндәйе лә бер, Ғәлимә. Етмәһә, ферма эшенә төшөнгәнмен.

Ул арала тәҙрә аша ихатаға ир кеше ингәне күренде. Мәҙинә самауырға йәбеште:

— Атайым ҡайтты! Сисен, Ғәлимә, бергәләп сәй эсербеҙ.

— Ә һин беләһеңме, Ишмәмәт ҡайтты бит ауылға! Күрһәң!..



09-2001.p65 130 29.08.01, 12:42
Black

— Беләм. Күрҙем. — Мәҙинәнең эсендә ниҙер өҙөлгәндәй булды. — Өй йылымы ул беҙҙең? Ҡалтыратасы... Сисен, сисен, һыу ҡайнаған!..

— Ҡабаланам бит әле. Киске һауынға китеп барышлаймын. Ә һинеке...

— Улым бар. Малай. Дауыт тип яҙҙыртам исемен. Әптеләхәтемдең дуҫының исеме...

— Хә-тә-әр...

— Ә нимә «хәтәр»?

— Былай ғына әйтәм. Әптеләхәттең... халыҡ дошманы икәнең беләһең, һин дә, әхирәт, сыҡмаған булыр инең уға кейәүгә, эйе бит?

— Ғәлимә! — Тамағына әхирәтенең һүҙҙәре төйөр булып тығылған Мәҙинә рәнйеү тулы күҙҙәрен Ғәлимәгә төбәне. — Миңә... башҡаса... ул турала!..

— Бөттө, бөттө! Ай алла! Кеше әйткәнгә генә... Ярай, мин китәйем! Ана, атайың килеп туҡтаны. Үпкәләмә, әхирәт!

Ғәлимә нисек ҡапыл килеп ингән булһа, шулай ҡапыл сығып китте. Мәҙинә, хәлһеҙләнеп, ширлеккә ултырҙы: «Башланды!» Эйе, был башы ғына. Ләкин бесәнгә киткән атаһы атын туғарып бөтөп килә. Инер. Мәҙинәне был килеш күрмәгәне яҡшы. «Ҡыҙым ҡайтты!» тигән ҡыуанысын Мәҙинә үҙе үк тартып алмаҫмы, былай булһа?

Мәҙинә, йәһәт ҡыбырлап, самауырға ҡайнар һыу һалды, утлығына ҡуҙ төшөрөп баҫҡас, мейескә тыҡҡан сөгөндө тартып сығарҙы. Өйгә быҒып бешкән картуфтың тәмле боҫо таралды. Аллаға шөкөр. Мәһинур апайы май-ҡаймаҡтан өҙмәй индереп тора, үҙҙәренең дә һыйыры елен төшөргән. Мәҙинә ҡумғанға йылы һыу һалып, һөлгөһөн иңенә һалды — атаһы бит инеп тә килә!

## *Дүртенсе бүлек*

Камалетдинов эштән ғәҙәтенән иртәрәк сыҡты. Ике ҡатлы ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған райком бинаһы алды күрәлгән. Ат ҡараусы Йыһанур ҡарт үҙе лә, райком бинаһын йыйыштырыусы әбейе Гөлмәрйәм дә бик тә тәртип яраҡкан әҙәмдәр булып сыҡты. Камалетдинов, кискә ҡарай туңдырһа ла көндөң яҙға ҡарағанын тойҙорған һауаны иркенләп һулайһулай, ат һарайына атланы. Бында биш ат. Шуларҙың икәүһе Тирәклеләге Һарайғыр тоҡомдары. Хужаның һарайға яҡынлағанын иң алда Айҡашҡа һиҙҙе. Ҡолаҡтарын үрә торғоҙоп, сыңғырлатып кешнәп алды. Аттар алдындағы һолоға ҡарағанда, Йыһанур ҙа ошо тирәләлер. Арғы ҡапҡа шығырҙап асылды, унан ҡарттың төлкө кәпәс кейгән башы күренде.

— Ә... Камалетдинов ҡусты... һин икән... Әллә берәй-яры бараһың бармы?

— Бөгөн... юҡ. Бесән етерлекме?

— Юл ҡалмаҫ борон, Ҡарағайтүбәләге кәбәнде шылдырыу мишәйт итмәҫ ине...

— Ә-ә... Иртәгә. Оноттормаҫһың әле.

—Ярай. — Ҡарт оҙон-оҙаҡ һөйләшеп торманы, йәнә арт ҡапҡанан сығып юҡ булды.

— Да... малҡайҙар. Яҙ килде, яҙ... — Камалетдинов уларҙың ҡайһыһының ялынан, ҡайһыһының морононан һыйпаны, «Чапай» ҡушаматлы ҡара айғырға шәкәр һоғондорҙо. Өйрәнгән. Бирмәһәң, һиҙгер ирендәре менән кеҫәләренде ҡапшай башлай. Аттан да аҡыллы мал юҡтыр. Ошолар менән бер йән, бер тән булып һуғыш йылдарын үтелде. Әптеләхәттең Саптары менән Камалетдиновтың Сыбарайғырының дуҫлығы! Саптар үлгәс, айғырҙың күҙҙәренән йәш сөбөрҙәп аҡты. Саптарҙы торғоҙорға тырышып, йәнтәслим кешнәп, эргәһендә ер тырнап сыркырап-һыкрап йөрөнө. Тора-бара ашауҙан яҙҙы, ә мөсһөҙ хайуан командирға юлдаш була алмай...

Ни тиклем генә башынан алып ташларға тырышмаһын, Әптеләхәт иҫенән сыҡмай Әйүптең. Бала сағынан белгәс, улы урынына ла, дуҫы урынына ла күргән был егеттең халыҡ дошманы булыуына күңеле ышанмай. Тик бит... яҙғандар. Мәскәүҙән ҡағыҙ ебәргәндәр. Ғаиләһен, туған-тумасаһын тикшерергә ҡушҡандар. Етем үҫкән Әптеләхәттең кеме булһын? Ҡатынын бөтәһе ике күрҙе: тәү тапҡыр Таулыла, уҡырға китергә йөрөгәндәрендә, икенсегә Мәскәүҙә — дөйөм ятаҡта. Ул саҡта Камалетдинов пленумға барғайны. Ҡунаҡханала таныша, шул пленумдан әйәртеп алып ҡайтты бит Мәликәһен. Дуҫының ҡатынының — Мәҙинәнең — һушты алырлыҡ һылыу икәнен күреү ярһыттымы — өйләнгәнен үҙе лә һиҙмәй ҡал-



09-2001.p65 131 29.08.01, 12:42
Black

ды Әйүп. Мәликә лә бит үҙенә күрә һылыу ҡатын. Ресторанда дуҫтары менән әҙерәк күңел асып алған Әйүпкә ул мәлдә шул еткән булғандыр инде... Етмәһә, оҙатырға вокзалға төшкән Әптеләхәттән: «Һинеке Мәҙинә булһа, минеке — Мәликә. Айырма юҡ, дуҫҡай!» — тип көлдө. Хәҙер аңлай ҙа ул: йыры, сихырлы ҡараштары менән һеңгәҙәтеп ултыртып ҡуйыр Мәҙинә һәм һалҡын, тәкәббер Мәликә араһындағы айырма — ер менән күк араһы. Ләкин нишләйһең, терһәк яҡын да, тешләп булмай.

Йорто партияның район комитетының ҡаршыһында ғына булғас, Әйүп Ғәзизович тиҙ килеп етте. Инергә ашыҡманы, тәмәке көйрәтте. Яҙ үҙенекен итә — урам эсендә иртән бер ни ҙә юҡ кеүек ине, хәҙер күләүек йыйылған. Йырып ебәрергә ине — көрәгенең барын-юғын белмәй. Ярай, бәлә түгел. Иртәгә Йыһанур ҡартты ебәрер. Ул килеп китһә, урам эсе бер талайға ялт итеп көлөп ҡала торған.

Эскә үтеп, өҫкө кейемен һалып, ҡулъйыуғысҡа ҡулын һуҙғанда ла башынан Әптеләхәт сыҡманы. Дөрөҫөн әйткәндә, Әйүп дуҫтарын күп юғалтты. Был тиклем мәхшәрҙән үҙе нисек иҫән ҡалғандыр? Балалар йортонда үткән етем үткәнеме, әллә атаәсәһенең контра ҡулынан үлеүеме ҡотҡарҙы уны?.. Ҡулын һөртөргә таҫтамалға үрелгәс, Әйүп көҙгөләге үҙ күҙҙәре менән осрашты. Шәп түгел — күҙ тирәһендә сырыштар, маңлайҙа һырҙар. Малай сағында йөҙөнә һөйкөмлөлөк биргән бит соҡорҙары ике буй һыҙат булып ятҡан. Ҡушылып үҫкән ҡаштары, оҙон керпекле ҡара күҙҙәре генә элекке Әйүпте танырлыҡ итә. Камалетдинов шырт баҫҡан сикәһен ҡапшаны: ахыры иртәнсәк ҡырынмай ҙа сығып киткән.

— Ҡайһылай, — халатын елберләтеп килеп сыҡҡан Мәликә, иренең ҡырыҫ йөҙөн күреп, туҡтап ҡалды. — Аш... өҫтәлдә.

Өҫтә бала тауышы ишетелмәгәс, Әйүп күтәрелеп торманы, ашарға ултырҙы.

Күренеп тора: көнө буйы яңғыҙ, бала менән талсыҡҡан Мәликәнең һөйләшкеһе килә. Иренең телен асырлыҡ һүҙ тапмағандай үҙе. Башлап Әйүп телгә килде.

— Флорида... йоҡланымы?

— Әллә... бер сәғәт тирәһе күҙен йомғандай булғайны...

— Доктор... килдеме?

— Үҙем барҙым.

— Кемгә?

— Теге.. Баш врачҡа... Лоҡман Талиповичҡа барғайным. Психиатр ҡатынды саҡыртты.

— Лидия Николаевнанымы?

— Эйе, шуны...

— Ни тине?

— Анализдар бирергә ҡушты. Бала сәләмәт кеүек, ти. Йоҡламаҫтай сәбәп юҡ кеүек, ти... Аш өҫтәйем?

— У-һу...

— Теге... урмансы ебәргән болан итен бешергәйнем...

— У-һу...

— Бер юлы Лоҡман Талиповичтарға инеп сыҡтым. Малайҙары шәбәйеп киткән, йүгереп йөрөй...

— У-һу...

Һүҙ артабан ялғанманы. Әйүп тәрилкәһенә текәлеп ашауын белә. Балаһы йоҡоһоҙлоҡ сире менән интекмәһә, Әйүп өйҙә телһеҙ кеүек йөрөр инеме икән? Ләкин Мәликә бирешеп бара торғандарҙан түгел. Бөтә мишәр ҡатындарына хас булғанса, телгә әүәҫ.

— Теге саҡ... бер йәш ҡатын һине һорап килгәйне...

— Ҡайһы саҡ?

— Теге!.. Байтаҡ булды инде, икеөс аҙна элек.

— Кем тине?

— Теге!.. Мәскәүҙәге... әйттең бит, ҡағыҙ килде тип.

— Әптеләхәттең!

— Эйе, шуның ҡатынымын тине. Әллә үҙе ҡорһаҡлы ла инде шунда.

— Шуны яңы әйтеп ултыраһыңмы?

— Бәй! Үткән-һүткән ҡатындар һине ҡыҙыҡһындыралыр тип...

Әйүп, ҡалағын ташлап, һикереп торҙо:

— Ә һин... кем?

Мәликә телен тешләне. Эйе, Мәликәгә шикле үткәне менән телен ҡырҡ ерҙән тешләп йәшәү хәйерле. Быны Мәликә күптән аңлаған. Аңлау менәнме? Әле лә ул иренә яуапһыҙ ҡала алманы:

— Абау! Берәүҙең әнкәйе терелеп ҡайтҡан тиерһең!

Камалетдинов башҡаса һүҙ ҡуйыртып торманы, ишек яҡтауында эленеп торған бушлатын арҡаһына һалып, тышҡа тартырға сыҡты...



09-2001.p65 132 29.08.01, 12:42
Black

* * *

Ҡайтыу менән өй йыуырға керешкән Мәҙинәне, бала ҡарашырға ингән Маһира күршеһен үҙҙәрен генә ҡалдырып, Хашим фермаға юл тотто. Ара-тирә мал тиҙәге, бесән, һалам менән сыбарланған, март ҡояшы аҫтында ярмаланып ауырайған юлдан атлағанда үҙенең олатай булыуы айҡанлы ҡыуанысһы ла, һағышлы ла уйҙар кисерҙе. Гөлбаныуы ғына юҡ янында. Йәнә Мәҙинәнең күңеле бойоҡ. Ошо йәштән тол ҡалырмын тигән уй башына ла килмәгәндер ҙә бит... Эшкә сығам, тигән була. Йоҙроҡтай балаһын ҡалдырып, Хашим уны ни йөрәге менән эшкә сығарып ебәрһен?!

Уйҙың осона сығырлыҡ түгел. Фураж һалынған келәт янына еткәс, салала бесән өҫтөндә нимәлер ҡарайып ятҡан кеүек булғас, Хашим шунда йүнәлде.

— Эй, кем бар унда?!

— Кем түгел, мин!

Санала аунаусының Шәңгәрәй икәнен белгәс, Хашим еңел тын алды. Яталыр. Уға ни, арҡаһын ҡояш ҡыҙҙырһа, шул еткән. Бөгөн хатта һыйырҙар ҙа, танһыҡ ҡояшҡа һырттарын ҡуйып, оло кинәнес менән көйөш ала. Шәңгәрәй Ғифрит исемле тоҡом үгеҙенән ҡурҡа. Шуға ахыры, саналағы һаламға күмелгән.

— Нимә эштәп ятаң бында? — Хашим түш кеҫәһенән бөкләнгән гәзит алып, тәмәке урай башланы.

— Күктә һуғыс бара, суны ҡарайым.

— Күктә?! Ә кемдәр һуғыша?

— Ҡара фәрестәләр менән аҡ фәрестәләр.

— Фәрештәнең ҡараһы ла була тиме?

— Була. Бөгөн улар күберәк. Улар бөгөн... беҙҙең мөрйәнән шыға.

— Юҡты!

— Ышын! Ант!

— Мин әле һине үҙ өйөңдә, атайың алдында ултыраһың тиһәм...

— Атам юҡ минең!

— Кит, иҫәүән! Әллә һаман күрмәнең?

— Ы!

— Нимә — «ы»?

— Ы! Ҡайтмайым. Беҙҙең өйгә... убыр эйәләсте!

— Ҡуй, Шәңгәрәй, алай һөйләнмә! Һуғыш бит. Мин бынан яманыраҡ ғәриплəнгән кешеләрҙе күрҙем. Ҡайһылай булһа ла үҙ атаң...

Шәңгәрәй былай ҙа тыржыҡ танауын асыуҙан һауа етмәгәндәй таржайтып, тороп ултырҙы.

— Юҡ, минең атам! Үлгән! Һинең менән, ҡарауылсы өйөндә йәсәйем!

— Мин бит, Шәңгәрәй, ҡыҙым ҡайтҡас, гел өйҙә булам. Һиңә тәрбиә кәрәк. Ашарыңа кем бешерер?

— Асарға бар! Күп! Һөт — бына! — Ул тынҡыш муйынына ҡағылды. — Үнәштән! Икмәкте... һауыншы апайҙар бирә!

Шәңгәрәй ҙә бирешмәй, ул бит иҫәр генә түгел, тиҫкәре лә бит.

— И-и... минең атам ҡайтһа-а! Мында түҙеп ятыр инемме?!. Миҙалдары күптер әле уның, ә бәлки, шәкәр ҙә алып ҡайтҡандыр...

Шәңгәрәй Хашимдың һүҙҙәренә ҡолаҡ та һалманы шикелле:

— Ә Мәҙинәнең бәпеше матурмы?

— Матур. — Шәңгәрәйҙең ҡарашынан Хашимдың «матур» тигән ыңғайына йылмайып ҡуйыуы ситтә ҡалманы.

— Миңә... оҡсамағанмы?

— Һиңә?! — Хашим сәсәне. — Ул нигә һиңә оҡшаһын? Уның атаһы бар. Атаһына оҡшаған.

— Һы!.. Ә ҡайҙа... йоҡлай ул?

— Сәңгелдәктә...

— Минең атам да сәңгелдәктә ята... Алыҫта!

Хашим тәмәке төпсөгөн йырғанаҡҡа ташланы.

— Һиңә әйттең ни, әйтмәнең ни!

— Әйтмә, мин үҙем беләм!

— Беләң атаң башын!

— Беләм!

Хашим, кәйефе ҡырылып, ары китте. Теләһә ҡайҙа аунап йөрөп һалҡын тейҙерә инде был шаҡшы. Атаһын әйт әле: йәһәннәмдән ҡайтырға хәле еткән, фермаға килеп балаһын күрә алмай...

* * *

Мирхәйҙәров, Мәҙинәнең ҡайтҡанын ишеткәс, оҙаҡ уйланды. Ул саҡта Мәскәүгә консерваторияла уҡырға талантлы кешеләрҙе бөтә ил буйынса эҙләнеләр. Моңло кешеләр күп, ә бына Мәҙинәнекеләй тауыш... Ҡыҫҡаһы, Мәскәүгә Тирәкле ҡыҙы алынды. Йыйылыштарҙа, мәктәптә сығыш яһарға тура килгән һайын Мирхәйҙәров Мәҙинәне маҡтаны, Тирәкленең шундай



09-2001.p65 133 29.08.01, 12:42
Black

ҡыҙ үҫтереүе менән ғорурланды, Хашимдан да унын хәлен әлдән-әле һорашып торҙо, сәй эскәндә лә, икәүҙән-икәү ҡалған башҡа ваҡыттарҙа ла Сәрбиназының да телендә Мәҙинә булды.

... Һәм бына ул ҡайтты. Көтмәгәндә, уйламағанда ҡайтып төштө. Яңғыҙы ла түгел — бала күтәреп. Эптеләхәтте лә яҡшы белә Азат. Ҡайҙа ҡушһаң, шунда эшләне, эште таҙаға-бысраҡҡа айырманы. Һуғышта ла башынан ахырынаса булды. Наградалар менән ҡайтты. Әле килеп Камалетдинов шылтырата: ғаиләһен контролгә алырға ҡушалар, ти... Хәҙер инде Мирхәйҙәров сәсеү ваҡытында, бер кеше бишкә ярылырҙай саҡта, Мәҙинәне ҡараүыллап ултырырға тейешме? Башҡа ҡайғыһы юҡ ине... Ҡар быйыл ҡалын булды, әкрен ирене, ә бит юғарынан сәсеүҙе 1-се майға тамамлап рапорт бирергә ҡушасаҡтар! Ни бер йүнле техникаһы юҡ, ирҙәр — бармаҡ менән һанарлыҡ. Ишмөхәмәт ҡайтты тигәстәре ҡыуанғайны, барып күрҙе — үҙ хәле үҙенә саҡ. Хәҙер бына... Мәҙинә. Кәнсә йыйыштырыусыны ебәргәненә лә байтаҡ булды. Ә, ана, инеп килә.

Мәскәүҙең үҙенән ҡайтып төшкән йәш, һылыу ҡатынды ултырып ҡаршылауҙы килештермәгәндәй, Мирхәйҙәров аяғүрә баҫты.

— Һаумыһығыҙ, Азат ағай! — Мәҙинә үҙенең нескә һылыу бармаҡтарын председателдең усына һалды.

— Арыубыҙ. Беҙ ни... ҡарттарса. Әйҙә, ултыр, һөйләп ебәр хәлдәреңде.

Мәҙинә берсә Мирхәйҙәровҡа, берсә унын өҫтәле эргәһендәге бейек булып үҫкән, ләкин емеш биреүҙән мәхрүм лимон ағасына ҡарап, һүҙһеҙ ултырыуын белде.

— Шунан? Мәскәү нисек?

Мәҙинә ҡыҙарҙы.

— Әллә инде, — беренсе тапҡыр был йәш ҡатын күтәрелеп Мирхәйҙәровҡа ҡараны. Азат шунда ғына үҙенең ҡаршыһында ауылдан сығып киткән бер ҡатлы сибәркәй түгел, ә күп нужа күргән, хәсрәт сиккән ҡатын ултырыуын төшөндө.

— Да-а... — Мирхәйҙәров артабан һүҙҙе нисек ялғарға белмәй аҙапланды. — Бына... сәсеү етә... һөрөргә, сәсергә... ней эш көсө етешмәй. Беҙ ҙә шул инде: юрғанды ҡайҙа тартырға белмәйбеҙ.

— Мине... ни өсөн саҡырҙығыҙ?

— Ә... һинеме? Үҙең инеп тә сыҡмайһың. Ана, клуб буш тора. Эш рәтен белгән кеше юҡ. Агитбригада төҙөргә, кәнсирт күрһәтергә ҡушалар. Әллә мәйтәм...

Мәҙинә, һүҙҙе бөткәнгә һананымы, аяғөҫтө баҫты.

— Башҡа тәҡдим булмаһа, мин уйлап ҡарармын, ағай. Балам да бик бәләкәй бит әле минең...

Мирхәйҙәров та торҙо, ҡулдарын ыуғыланы:

— Беҙҙең крәҫтиән халҡы... баланы сәбәп итмәй инде ул, ҡарындаш... Бала ни ул, ҡырҙа тапһаң, ҡырҙа, фермала тапһаң, һыйыр араһында үҫә, тигәндәй... Беҙҙә ни... шулай бит инде ул.

— Һау булығыҙ, Азат ағай...

Тәмәке, төтөн, сәләркә, дегет, ҡайыш еҫе һеңгән кәнсәлә әллә йәшлегенән, әллә үҙенең матурлығынан яралған ниндәйҙер аңлашылмаған аңҡышбалҡыш ҡалдырып, Мәҙинә сығып китте. Мирхәйҙәров дүрт тәҙрәле идара йортоноң әле бер, әле икенсе тәҙрәһенә яҡын килеп, алыҫая барған һынды күҙәтте. Хур ҡыҙы! Ләкин был балала һылыулыҡтан башҡа тағы ниҙер бар бит? Һуң, иллене үткән башың менән ошо тал сыбығылай һын алдында төҙгә ҡатҡан һалдат шикелле баҫып торсәләң!.. Эш булғас бит, төрлө саҡ була, икенсе юлы Азат был сибәркәй менән һис шикһеҙ ҡатыраҡ һөйләшер, теҙгенде ҡыҫҡараҡ тотор. Райком шулай ҡуша икән — үтәмәй ни әмәлең бар?..

* * *

Таулыға военкоматҡа барып ҡайтҡандан һуң шөйлә кәйефе күтәрелде Ихсанбайҙың. Военком, сандыр кәүҙәле сулаҡ егет, Ихсанбайҙың ҡиәфәтен күргәс, тиҙерәк сығарып ебәреү яғын ҡараны. Әммә Ихсанбай мәмерйәлә ятҡанында төндәр буйы ижад иткән «хикәйәт»ен түкмәйсәсмәй яҙҙырырға тырышты. Нисек итеп Себергә китеп барған поезды бомбаға тотҡандарын, вагондарҙың янғанын, Ишмөхәмәттең дә шул ут эсендә ҡалыуын... Осо осҡа ялғанмаған нәмәләр ҙә булғандыр инде, военком үтә-үтә ҡараны, әммә иҫе инәрле-сығарлы ғәриптән ни көтмәк кәрәк? Ана бит әле унын үҙен дә һуғыш йәшһең, матурһың тип аяп тормаған. Унын да бынау оҙон, ҡамыштай



09-2001.p65 134 29.08.01, 12:42
Black

төҙ бармаҡтары, бәлки, гармун телдәре буйлап та йүгергәндер...

— Их, гармун... Гармун уйнау бөттө инде! — Ишмөхәмәттең ауыҙынан ғыжылдап сыҡҡан ошо һөйләм военкомдың күҙендәге юшан төҫөп ҡараһыулатты:

— Гармунда уйнай инегеҙме?

«Ишмөхәмәт» янып кәкерәйгән ҡулын һелтәне:

— Һәй...

Сәпкә тейҙе Ихсанбай: военком йөҙөндәге ҡоролоҡ йәлләү, ниндәйҙер һағыш менән алышынды.

— Бисә лә көтмәгән, — Ишмөхәмәттең тауышына илау ғәләмәте сыҡты, — ғәрип ни... кемгә кәрәк?!

— Ярай, ағай, ҡайтығыҙ. Кәрәк булһа, саҡыртырбыҙ. Председателегеҙгә шылтыратырмын. Ярҙам итерҙәр.

— Рәхмәт, рәхмәт инде, ҡустым... Бына бит. Яҡшы кешеләр бөтмәгән. Ғәриплекте кеше һорап алмай икән... — Ихсанбай, таяғына таянып, ишеккә туйтаңланы. — Шунда ҡотҡармаһалар, янып үлһәм, был ыҙаларҙы күрмәгән булыр инем.

Шунан бирле өйҙә Ихсанбай. Зарифа үлгәс, мал бөткән. Шарик, күрәһең, ҡыш фермала, йәй бында, аласыҡта, йәшәгән. Ҡапҡаны асып тормай, ҡапҡа аҫтынан ятып инеп йөрөнөмө икән — урталыҡ шымарып, соҡорайып ята. Ишмөхәмәт ғүмеренә түрә булып ултырғас, йорт-ҡаралтыһы былай ипһеҙ түгел. Малухалар, мунса — бөтәһе бүрәнәнән һалынған, картуф ере лә ҙур, кәртәле. Әммә яңғыҙына тормошто башлап китеүе ауыр буласаҡ. Хәйер, Ихсанбай бер ҡасан да юҡтан бар итеүҙе белмәне. Атаһы һалған әҙер донъяла, әсәһе әҙерләгән әҙер һыйҙа — барлыҡта-байманлыҡта йәшәне.

Әйе... ҡатын-ҡыҙһыҙ ауыр буласаҡ уға. Ихсанбайҙың был хәлендә ниндәйҙер хур ҡыҙын өмөт итеү урынһыҙ. Үҙен-үҙе белгән — әүлиә, тигәндәй, уны ғына яҡшы аңлай ул. Был хәлдә уға үҙ теләге менән Мәҙинә түгел, теге Ғәлимә лә килмәйәсәк! Унан һуң бит Ихсанбай Сәбиләгә — күндәм холҡло бисәгә — өйрәнгән. Ауылда яңғыҙ ҡатындар күп күплеккә, ә бына Ихсанбайҙы ошо килеш ҡабул иткәндәйҙе... Әллә, олораҡ булһа ла, Раузаның ҡылын тартып ҡараһа? Магазинда эшләй, ыбыр-сыбыры юҡ, иргә сығып алыуын алһа, елямғыр тейҙермәҫе көн кеүек асыҡ. Ул бахырҙың бит бер генә тапҡыр ҙа әҙәм рәүешле кейәүгә сығып ҡарағаны юҡ. Ул бына ғәрип тип тормаҫ ине. Әллә инде, бөтә ҡыйыулығын йыйып, Раузаға тәҡдим менән бараһы?

* * *

Ҡәйнәһе: «Бала ике йәшенә ҡәҙәр имергә тейеш», — ти торғайны. Дөрөҫ, башта Сәбилә һөтөн һауып биреп торҙо, әммә бала йылыһын тоймаған түштәре, Сәбиләнең ихтыяр-теләгенән тыш, тиҙ шинде. Хәҙер улар Сәбилә күкрәгендә кәрәкһеҙ бер яры булып, һәленеп-һәлпәйеп яталар. Әйтерһең дә улар бер ҡасан да алһыуланып, турһыҡтай тулғанып тормаған.

Һирәк күрә хәҙер улын Сәбилә. Ошо таш аласыҡ ҡасандыр ниндәйҙер байҙың келәте булған тиҙәр. Хәҙер ағаһының, ошо район дауаханаһының баш табибы Лоҡмандың, өйө менән йәнәш ултырған дауалау йортоноң кер йыуыу урыны. Дауахананың керен ошонда килтерәләр, Сәбилә уларҙы йыуып-үтекләп ҡуйғас, алып китәләр. Көнтөн ҡаҙан аҫтына ягырлыҡ утынды ла Сәбилә үҙе ҡырҡа, үҙе яға, унан тыш ағаһының ишле генә малын да ҡарай. Сәбилә сираттағы халатты ялғашҡа һалыр алдынан, кеҫә төптәрен ҡағып таҙартыр өсөн, ҡулын тыҡты. Кеҫәһенән ике ҡағыҙ килеп сыҡты. Икеһендә дә хөкүмәт гербы, Таулы район үҙәгенең никах теркәү бүлегенең мисәте. Уларҙың икеһендә лә Әбүбәкерҙең исеме бар. Беренсеһендә уның атаһы — Моратов Ихсанбай Сибәғәт улы, икенсеһендә — Ҡарағужин Лоҡман Талип улы. Атаһы Моратов Ихсанбай тип яҙылған ҡағыҙҙа әсәһе ул, Сәбилә. Атаһы тигән ергә Лоҡман яҙылғанында — Ҡарағужина Раиса Максимовна. Әйе, улының ата-әсәһе тип йәштәре илленән уҙған ағаһы менән еңгәһе теркәлгән! Ғүмер буйы бала күрмәй йәшәгән-йәшәгәндәр ҙә, иллене үткәс, ҡапыл ғына бала табып алғандар! Теге экиэттәге ҡамырҙан әүәләнгән батыр кеүек... Сәбилә ошо ҡағыҙҙарҙы йәһәт кенә өрлөк бүрәнәһендәге еккә ҡыҫтырҙы. Ҡайһылай итергә, ни сара күрергә?! Белгәнен баҫырып ҡалдырһа, улын ғүмергә юғалтасаҡ. Ҡағыҙҙарын күтәреп янъял сығарһа?... Юҡ! Үҙ аҡылы ғына етмәй уға! Их, ошо мәл эргәһендә ҡәйнәһе Фәүзиә булһасы?! Ни кәңәш бирер ине икән ул? Ейәндәре булыуҙы нисек көткәйне, нисек теләа-



09-2001.p65 135 29.08.01, 12:43
Black

гәйне уның ҡәйнәһе... Теге төндә лә... Ул төнгә Сәбилә әлегә тиклем һөйөнөргә лә, көйөнөргә лә белмәй. Эсен ҡосаҡлап ятҡан килене эргәһенә киске эңерҙә килеп ингән ҡәйнәһененең тауышы ҡырҡыу яңғыраны.

— Килен?! Һин өйҙәме?

— Өйҙә... — Илап ебәреп ҡәйнәһенең асыуын килтереүҙән ҡурҡҡан Сәбилә аҡланырға, гәфү үтенергә тырышты. — Шәмгә ут алмай ултырамсы...

— Кәрәкмәй. Йыйын. Бер аҙ һауыт-һабаңды, арыу кейемдәреңде ал. — Шунан ул үрмесендәге асҡыстарын урындыҡҡа ташланы. — Һандыҡтағы алтын-көмөш ҡалаҡтарҙы, селтәр-ҡашмауҙарҙы ла ҡуша төр. Мин ат егәм.

«Ҡайҙа китәбеҙ?», «Ни өсөн?» — тигән һорауҙы бирмәне Сәбилә. Ҡәйнәһе тоҡтомалдан ярһып йөрөмәҫ. Йөрәгенең елкенгәнен, ҡулдарының ҡалтыранғанын күскә еңеп, Сәбилә ҡәйнәһе ҡушҡандарҙы үтәне. Йыйынған ыңғайға ҡулы бер-нисә тапҡыр Ихсанбайҙың кейем-һалымына ҡағылып китеүҙән тәне эҫеле-һыуыҡлы булып, тыны быуылды: әгәр ул белеп ҡалһа, әгәр ул йәшенеп торһа... Ҡасандыр бөтә йәнен-тәнен мөхәббәт менән тулышырға мәжбүр иткән ошо кешенең бөгөн килеп... Мәгәр Сәбиләнең хәтерләүҙәргә бирелер хәле юҡ, эсендәге сабыйы сабырһыҙланып тулғанып ҡуйғас, ул ашығыбыраҡ, ашҡыныбыраҡ йыйына башланы.

— Аттар әҙер. — Ҡәйнәһенең тауышы был юлы ла үтә ҡоро ине.

— Уй! бөтә нәмәмде лә йыйып өлгөрә алманым ахыры!

— Ике-өс минутта түгел, бәндә ғүмере буйына ла бөтәһен дә йыйып бөтөрә алмай!

— Шулай ҙа ул... — Сәбилә, төйөнсөктәре эргәһенә баҫып, ғәҙәтенсә күндәм генә фарман көттө.

— Ултырайыҡ. — Ҡәйнәһе эңерҙә аҡһыл кеүек күренгән сырайы, ҡара күҙҙәре менән килененең арҡырыһын-буйын үлсәгәндәй, тишеп-һынап ҡараны. — Әйтәһе һүҙем шул. Ошо аттарға ултырып Таулыға, Лоҡманға бараһың. Бынан киткән бер нәмә лә кире ҡайтмай. Аңланыңмы! — «Аттар ҙамы?» — тип һорарға итте Сәбилә, ләкин ҡаушаны. — Шунда йәшәйһең. Унда икәнеңде һис кем белмәһен! Баланы имен-һау табып, — ошо урында ҡәйнәһенең тауышы дерелдәне, — үҫтер. Эйе. Хәлеңдән килһә, буйын ғына түгел, аҡылын да үҫтерергә тырыш. Анау алтын ҡалаҡ, һауыт-һабаны Лоҡманға бир — иткән игелегенең әжере шул булыр. Бөгөн һинең юлға сығыуыңды ул ғына белә.

— Ҡәйнәм!.. — Сәбилә бергә йәшәгәне бирле тәү тапҡыр ошо гүр эйәһеләй ҡара ҡарсыҡты ҡосаҡлап алғыһы килде, әммә ҡәйнәһе теҙгенде ғәҙәттәгесә ҡыҫҡа тотто:

— Әйтер һүҙем бөттө. Аттар яҡшы ял иткәндәр — ҡыу, йәлләмә. Үҙеңә лә, тыуыр сабыйға ла фәтихамды бирәм. Аллаһы әкбәр!..

Шулай хушлашты улар. Анау ҡағыҙҙарҙы ҡәйнәһе күрһә, нишләр ине икән?..

— Сәбилә?! — Ағаһының тауышын ишетеү менән ул урындыҡтан иҙәнгә һикереп төштө.

— Ни булды, ағай?!

— Тағы... ағай!

— Әй эттәгенәһе... Ни, Лоҡман Талипович бит әле...

Лоҡман, аҡ халаты күренә биреп торған ҡыҫҡа күн тунының төймәләрен ысҡындырып, урындыҡ ширҙегенә ултырҙы.

— Шунан, Сәбилә, кәйефтәр нисек?

Сәбиләнең һүҙе күп ағаһына, ләкин ул Лоҡмандың ҡыҫыҡ ҡабаҡтары араһынан һөңгөләй ҡаҙалған үткер ҡарашы аҫтында баҙаны:

— Әлләсе... Кәйеф ни...

— Йомошоң юҡмы ни миндә бер ҙә? — Ағаһы уға баяғынан да һынабыраҡ тексәйҙе. — Бер һорауың да юҡмы?

«Һынаймы, тикшерәме? Теге ҡағыҙҙарҙың Сәбиләлә икәнен белһә, Лоҡман уратып һөйләп маташмаҫ ине. Һунарсы бит ул. Һунарсы эҙәрләгән йәнлегенең йомшаҡ яғын белгәнгә күрә лә һунарсы ул, ти торғайны ҡәйнәһе». Яуап менән ашыҡманы Сәбилә, өндәшмәй тороу ҙа килешмәгәндәй, ағаһының йоморо башына бер-бер шикле уй төшөү бар...

— Әлләсе, — тине тағы Сәбилә, кипкән керҙәрен бауҙан ала-ала. — Таң ата ла кис була, ғүмер үтә...

— Ғүмер бер беҙҙән генә үтәме? — Лоҡман дауаханаһы яғына ымланы. — Ана, унда көн дә тиерлек кеше үлә.

— Шулайҙыр инде: үлем менән ҡунаҡ һорап килмәй, ти торғайны Әбүбәкерҙең өләсәһе, — Сәбилә үрелеп усаҡ мөрйәһен асты. — Тик инде, йәл



09-2001.p65 136 29.08.01, 12:43
Black

бит. Йән. Кеше түгел, бәпкә ятып үлһә лә йәлләмес...

— Унығын да ҡәйнәң ҡарсыҡтан ишеттеңме? — Лоҡман, ҡапыл ҡалҡынып, тун төймәләрен ҡаптыра башланы:

— Бына нимә, Сәбилә ҡарындаш: Әбүбәкерҙең донъяла барлығын оноторға кәрәк һиңә.

— Әбүбәкерҙе?! Онотоорға?! Ағай!.. — Сәбилә үрһәләнеп унын алдына килеп баҫты. — Мин бит уның... әсәһе!

— Һинең балаң булманы, Сәбилә! — Лоҡмандың ялбыр бүрек аҫтынан уҫал ялтыраған ҡараштары йәнә Сәбиләгә ҡаҙалды. — Вәгәҙәнде онотоуың шулмы?! «Балам!..»

Лоҡмандың «с» хәрефен әйткәндә ҡапыл салшая торған аҫҡы ирене ғәҙәттәгенән ныгыраҡ бөгөлдө:

— Сәбилә! Мин ҡабатларға яратмайым! Әбүбәкергә һин нимә бирә алаһың? Ошо... балнис аласығынмы?!

— Балам... Сабыйым... — Йыйған керҙәрен аңғармаҫтан күкрәгенә ҡыҫҡан Сәбилә, өңөрәйеп ятҡан оло буш ҡара ҡаҙанға ҡараны ла тораташтай ҡатты.

* * *

Шәңгәрәйҙең табалағы ҡоймаҡтай түңәрәк тормошон фермаға Ғифритте килтереү боҙҙо. Фермала мал араһында һыуҙағы балыҡ һымаҡ йөрөгән Шәңгәрәйҙе шул нәсел үгеҙе тәү күргәндән яратманы. Унын йоморо яланғас түбәһе күренеүе була — ер тырнап үкерергә керешә хайуан, алдында үҙе шайы ғифрит торғандай күреп, һөжүмгә ташланырға самалай.

Дөрөҫөн әйткәндә, Ғифрит ҡушаматлы был үгеҙҙән һауынсылар үҙҙәре лә бөжөмләй, малсылар ҙа уға бик яҡын юлап бармай. Шәңгәрәй шуға аптырай: ҡурҡҡастары ниңә уны һатып алдылар икән? Ана, башҡа үгеҙҙәрҙе егеп тә йөрөйҙәр, ер ҙә һөрәләр — береһе лә ҡурҡмай. Шәңгәрәй ошо хаҡта бер Хашимдан һорай биреп тә ҡуйғайны. Хашим һәр ваҡыттағыса оҙон-оҙаҡ сурытманы.

— Тегеләр көйҙөртөлгән... Ну бына... бестерелгән, ә был — юҡ.

Ғифриттең ни өсөн әҙәм ҡурҡырлыҡ көслө икәне Шәңгәрәйгә һуңлап ҡына барып етте: бөтә ғилла үгеҙҙең моҡсаһында! Көсө шунда уның! Башҡа үгеҙҙәрҙекен ҡырҡып ырғыталар, ә быныҡы тора. Шәңгәрәй бына үҙе лә көйҙөртөлгән. Эйе, атаһы бер бабайҙы алып килеп, үҙе ҡарап тороп ҡырҡтырҙы. Ҡырҡып бөткәс, бабай:

— Ауыртамы, улым? — тине.

— Ауыртмай, ҡырҡҡың килһә, иссу ла ҡырҡ, — тине Шәңгәрәй.

Бабай атаһы биргән аҡсаны кеҫәһенә тыҡты ла йәһәт кенә тайҙы. Хәҙер шуға үкенә Шәңгәрәй: алйотланып ҡырҡтырып әрәм итмәһә, ул да хәҙер Ғифрит кеүек көслө булыр ине! Бөтөн әҙәм, этәсе, ҡаҙы, күркәһе — һәммәһе унан ҡурҡып торор ине! Сүплеккә сығып, ҡырҡылған ағзаһын әллә нисә тапҡыр эҙләп тә ҡараны Шәңгәрәй — тапманы. Әллә ҡорт ашаны, әллә инде берәй оңҡото табып алып үҙенә йәбештерҙе. Эйе, эйе!.. Үҙенән был донъяла бер кемдең дә, бер нимәнең дә ҡурҡмағанына ныҡ йәне көйә Шәңгәрәйҙең. Ана, Сталиндан да бөтә йән эйәһе ҡурҡып торҙо. Кеше ҡурҡытырлыҡ булғас, уныҡын, күрәһең, ҡырҡып ырғытмаған булғандар.

Их! Терһәкте бит тешләп булмай. Әгәр ҙә теге саҡ атаһы бабаны өйөнә алып ҡайтмаған булһа, бөгөн Шәңгәрәй өҫтәл артында түрә булып ҡуҡ итеп ултырыр ине! Ана, Мирхәйҙәров шикелле. Ә бына хәҙер Шәңгәрәйҙән этем дә ҡурҡмай, үгеҙенең үгеҙе һөҙөшә!

Шәңгәрәй һыйыр аҙбарының бер мөйөшөн кәртәләп ҡамап ҡуйылған Ғифритте ситәндең тишеге аша оҙаҡ күҙәтте. Әлдә теге күрмәй. Атуса, тояҡтары аҫтындағы сүп-сарҙы күккә сойорғота башлар ине.

— Нишләп тораһың ул? — Хашимдың тауышын ишетһә лә Шәңгәрәй күҙен ситән ярығынан алманы. — Һиңә әйтәм, Шәңгәрәй!

— Хасим! Мал шала торған бысаҡ кәрәк миңә!

— Аны нишләтәһең?

— Ғифриттең... муҡшаһын ҡырҡып ырғытам.

— Ә?!

— Эйе, йоҡтаған сағында арттан киләм дә! Ҡых!..

— Ҡара, ҡара! Нимә уйлап тора! Алйот! Колхоздың үгеҙ өсөн күпме аҡса түккәнен беләһеңме һин?

Шәңгәрәй аҡсаның ҡөҙрәтен белә: үҙе күпме түләне Гөлбаныуға!

— Үҙе нигә мине баҫтыра?!

— Бар, тай бынан, Шәңгәрәй! Килеп көнө-төнө тексәйеп йәнен көйҙөргәс, баҫтыра инде! Бына мине нигә баҫтырмай? Бар, кит бынан, тай!

— Ы!

— Нимә тағы «ы»?

— Әҙерәк ҡарайым әле.



09-2001.p65 137 29.08.01, 12:43
Black

— Фу, инәнде эт йыҡҡан нәмә!

Хашим малға фураж таратыр мәл еткәнгә ашығып китеп барҙы, Шәңгәрәй, ситәндәге тишекте бармағы менән соҡоп ҙурайтып, туйған үгеҙҙең йоҡларға ятыуын көтөп ҡалды.

* * *

Ҡалын һымаҡ күренгән көрт көндән-көн нығыраҡ шиңә. Тау баштары асылды ла инде. Күкбүренең өңө алдында ла ҡара ер көндән-көн ҙурая. Күкбүре, ҡояшта ҡыҙынып алмаҡ булып, өңөнән сыҡты. Сыҡты ла ары китмәне, йылынған саңдауға ятты ла, аяҡтарын һуҙып, моронон өҫкә күтәрҙе, көнбайыштан иҫкән йомшаҡ ел менән килгән еҫтәрҙе ауланы. Ауыл яғынан тиреҫ, мал еҫен килтерә ел. Хәҙер ярмалы ҡарҙа ҡуян, төлкө эҙҙәре ярылып ятмай, ауыл йыраҡ. Унан һуң, Уҙаман үлгәне бирле Күкбүренең яңғыҙы һунарға сыҡҡыһы, йөрөгөһө лә килмәй. Уҙаманды иҫләүҙән уның йәне тағы нығыраҡ һыҙланы, ул сыйнап, тештәрен шаҡылдатып, өңө алдында түңәрәк яһап йөрөп алды ла тағы ятты. Эх! Оҙаҡ булманы уларҙың ҡыуанысы! Күкбүре үҙенең теге саҡ айға ҡарап сараһыҙлыҡтан олоп ебәреүен иҫләне. Ул саҡта һәр тереклеккә һалынған тоҡом дауам иттереүгә сарсау ауазын ишетеп, Уҙаман килгәйне. Ә хәҙер — юҡ. Ул килмәйәсәк. Күктау мәмерйәһенең ауыҙы янында ята уның һөйәктәре. Ырашҡылап торған үткән йылғы яҙҙа һунарға китеп харап булды ул. Күкбүре, йөрәгенә осло ҡаҙауҙай сәнселгән үсен алмаҡ булып, әллә нисә барып әйләнде шул урынға — әммә кеше еҫе танауына бәрелмәне... Әллә инде әҙәм төләгенән китеп яңылышты микән Күкбүре? Ауыл эттәренең ни, кәнтәйе үләме, арҙанымы — ҡайғырған зат юҡ. Бүреләрҙең яңғыҙ инәне ситләтеү, өйөргә яҡын юлатмау ҡанунын ул да бит белмәй ине! Яҡын барып ҡара берәйһенә: инә бүреләр хәҙер боғаҙыңа йәбешер!

Күкбүре яңғыҙлыҡтан, асығыуҙан, һағыштан йәнә сыйнаны, йәнә башын юғары сөйҙө: ауыл яғынан килгән таныш, тәмле еҫтәр йәнә күңелен ҡытыҡланы, эсендәге һағыш, сараһыҙлыҡ менән ҡушылып, баяғынан да көслөрәк ярһыу менән олорға мәжбүр итте...

*(Дауамы киләһе һанда)*





09-2001.p65 138 29.08.01, 12:43
Black